*✓Шул тиклем күрә алмаған дошманың бармы? Булһа, һин уға байлыҡ, тормош ләззәттәре, күңел асыуҙар, сикһеҙ власть телә: күрерһең, ул ошолар арҡаһында һәләк буласаҡ.*

*(Жан Робин).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26 ИЮНЬ - 2 ИЮЛЬ (ҺӨТАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №26 (392)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Һау бул, мәктәп,** һаумы, оло тормош! — 4



**Аҡ сабаҡкай кеүек килеп ҡаптым...** йәки Ҡаҙағстан тотҡоно Салауаттың күргәндәре — 6-7



**Мәктәбе ниндәй - дәүләте шундай,** йәки Халыҡ шағирының башҡорт мәғарифы тураһында әйткәне — 8-9



**Әсә булыу бәхете...** әхлаҡлылыҡ аша килә — 12



14 ТВ-программа


БАШ ҠАЛА ҠУНАҒЫ

# БАРЫҺЫ ЛА ЯҠТЫ СЫРАЙЛЫ,

## һөмһөҙҙәр йәшәмәй Өфөлә

**Күптән түгел булып үткән III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ҡатнашыу өсөн Өфөбөҙгә донъяның төрлө төбәктәренән бихисап милләттәштәребеҙ йыйылды. Уларҙың ҡайһылары нисәнселер тапҡыр, ә ҡайһыларының тәүге тапҡыр килеүе ине. Нисек кенә булмаһын, уларҙың баш ҡала тураһындағы тәьҫораттары аңлатып бөткөһөҙ. Был турала улар һеҙҙең менән дә уртаҡлашмаҡсы:**

**Руслан ҠАСИМОВ, Ленинград өлкәһе Гатчина ҡалаһы:** Мин Өфөгә тәүге тапҡыр биш йыл элек килгәйнем. Ошо йылдар эсендә баш ҡала тулыһынса үҙгәргән. Бөтә ерҙә таҙалыҡ, тәртип. Минең иғтибарымды бигерәк тә урамдарҙағы ҡәнәғәт, шатлыҡлы йөҙҙәр йәлеп итте. Асыулы, һөмһөҙ кешеләрҙе бөтөнләй күрмәнем тиерлек. Заманса машиналар күбәйгән. Был ҡаланың яҡшы йәшәүе тураһында һөйләй. Тик бер генә нәмә: мин бында халҡыбыҙҙың милли колоритын күрергә өмөтләнеп килгәйнем, әммә көткәнем аҡланманы. Күңелдәге ошо рухи бушлыҡты тултырыу өсөн мин көн һайын Башҡорт дәүләт академия драма театрына спектаклдәр ҡарарға йөрөнөм.

**Лидия БАЙҒУЖИНА, Силәбе өлкәһе Озерск ҡалаһы:** Өфөгә бер нисә тапҡыр килгәнем бар ине. Был юлы ул мине бигерәк нык һоҡландырҙы. Шул тиклем төҙөк, матур ҡала, урамдары таҙа, йыйнаҡ, кешеләр ҙә ихлас, асыҡ сырайлы, көләс йөҙлө. Өфө буйлап йөрөгәндә үҙенде үҙ өйөңдәгеләй хис итәһең, күңелгә шул тиклем рәхәт. Тағы ла "Салауат Юлаев" һәйкәле майҙанында ла, бүтән урындарҙа ла һыра, араҡы кеүек спиртлы эсемлектәр эсеп йөрөүселәрҙең булмауына иғтибар иттем. Тәртип, мәҙәнилек көслө бында.

**Андраш БИРО, Венгрия:** Мин Башҡортостанда беренсе тапҡыр түгел, эш буйынса башҡорт коллегаларыма килгәнем бар ине. Күргән һайын Өфөгә һоҡланып бөтә алмайым, шундай таҙа, гүзәл ҡала. Урал тауҙары был дәүләткә шундай мөһәбәт һәм олпат төҫ биреп тора, ғөмүмән, тәбиғәт бик матур бында.

Башҡорт еренә аяҡ баҫҡан һайын оло тулҡынланыу кисерәм, сөнки боронғо мадьяр һәм боронғо башҡорттарҙың ортаҡ тамыры бар икәне билдәле. Был турала антропологик табыштар һөйләй. Әлеге ваҡытта беҙ ғалим-антрополог Ринат Йосопов менән башҡорт һәм мадьяр бәйләнештәрен асыҡлау буйынса ҙур проект өҫтөндә эш башлап торабыҙ.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ



**➔ Боронғо Урал тибы күберәген беҙҙең ҡыҙ-ҡатындарҙа һаҡланып ҡалған. Популяцион генетика күҙлегенән ҡарағанда, беҙҙең ҡыҙ-ҡатындар милләттең иң боронғо генетик мәғлүмәтен үҙендә йөрөтә. Милли сифаттар ҙа балаларға ҡыҙ-ҡатын аша күсә. Көньяҡ Урал климатында яралған һәм шуға ҡулайлашҡан был мәғлүмәтте йөрөтөүсе ҡыҙ-ҡатындарҙың генетик үҙенсәлеге улдарына һәм ҡыҙҙарына тыумыштан уҡ күсә. Башҡорт ирҙәренең бер өлөшө лә Урал тибына ҡарай, әммә улар бик аҙ ғына. Урал тибына ҡараусы ҡыҙ-ҡатындарҙың, ирҙәрҙең сәләмәтлеге лә ныҡ була. Улар ауырыуҙарға бирешеп бармай һәм оҙағыраҡ йәшәй. Төрлө көтөлмәгән тәбиғи һәләкәттәр, катаклизмдар, эпидемиялар ваҡытында, аслыҡ кисергәндә күбеһенсә ирҙәрҙең үлеүе лә ошо фактҡа бәйле.**

**Ринат ЙОСОПОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# РИШҮӘТСЕЛЕК СӘСКӘ АТА

**Рәсәйҙә коррупцияға ҡаршы көрәш иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, ришүәтселәр һаны һәм ришүәт күләме артҡандан арта бара.**

Рәсәйҙең 45 төбәгендәге 130 ҡала-ауылдан 1600 кеше ҡатнашлығында "Левада-Үҙәк" тарафынан үткәрелгән социологик һорау алыу һөҙөмтәләре шуны күрһәтте: Рәсәйҙә ришүәтселек кимәле "сүпрә" кеүек ҡабара бара. Һуңғы 4 йылда илдә ришүәттең уртаса күләме ике тапҡырға тип әйтерлек артты: 2006 йылғы 5048 һумдан 2010 йылда 8887 һумға тиклем барып етте. Шуныһы ғәжәп: шул уҡ ваҡытта ришүәтселәр сафы бик күпкә артмаған - 27 проценттан 31 процентҡа еткән.

Ришүәттең иң "сәскә атҡан" урыны - фирманы теркәү һәм эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегенә рөхсәт алыу өсөн "баш һалып" килеүселәр менән ҡала түрәләре араһында. Ошо юлда йөрөүселәрҙен үҙҙәренең һүҙҙәренә ҡарағанда, уларҙың 92 проценты түрәләргә ришүәт биргән.

Социаль тикшеренеүҙә ҡатнашҡандарҙың 65-67 проценты - юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу менән бәйле ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренә, 43-45 проценты - судта енәйәт эше ҡаралғанда, водитель таныҡлығы алған саҡта, автомобилде теркәгәндә йә техосмотр үткәндә, 38,5 проценты енәйәт яуаплылығына тарттырылыу менән бәйле ришүәт бирергә мәжбүр булған.

Бынан тыш, армияға саҡырыу мәлендә - хәрби комиссариаттарҙа, уҡырға ингәндә - вуздарҙа (30 процент), баланы мәктәпкә биргәндә (27 процент) мәғариф әһелдәре ришүәт ала. Хәйер, ҡайҙа ғына алмайҙар ул ришүәтте!

Бәхеткә күрә, ришүәтселек факттары кәмегән өлкәләр ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән, ер һатып алыуға йә иһә тәҙөләш өсөн рөхсәт алғанда тикшеренеүҙә ҡатнашҡандарҙың 1 проценттан да азырағы ришүәт биреүе хаҡында белдергән. Ә 5 йыл элек кенә ошо уҡ процедура өсөн ришүәт биреүсе респонденттар 21 проценттан да күберәк ине.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ЙОМРАНДЫҢ УЙҒА ҺАЛҒАНЫ

Мәғрүр Торатау янында үткән "Салауат йыйыны"н майҙандың Стәрлетамаҡ ҡалаһы яғынан тамаша ҡылыусылар урталыкта ҡамауҙа ҡалған бер йомранға иғтибар итмәй ҡалмағандыр, моғайын. Ситтән ҡарағанда оло мәҙәк ине йәнлектең үҙ ояһына инә алмай, ҡырағәләмәт килеп ҡаңғырып сабыуылдауы. Урталыкта барған театрлаштырылған тамаша йомранға үҙ өңөнә инеп ҡасырға ҡамасаулағанға күрә, бахырҡай, ары сапты, бире йүгерҙе. Тамашала ҡатнашыусылар түңәрәк буйынса арҡырыға хәрәкәт итә башлауы була, йомран да улар ыңғайына ҡуҙғалып китеп, үҙ өңөнә яҡынларға тырыша. Был майҙанды бөтөнләй ташлап, тау яғына ла китер ине, тамашаны уратып баҫҡан ун меңдән ашыу кеше тере ҡоршауҙы хасил иткән. Бик оҙаҡ хитланғандан һуң йомран түҙмәне, был юлы инде кешеләргә яҡын килеүҙән дә тартынмай, ояһына йүгереп инеп тә китте...

Йомранды күҙәткән башҡалар нимә тураһында баш ватҡандыр, мин иһә глобалләшеү хаҡында уйландым. Тыуған ерҙе, мөхитте, рухты, асылды баҫып килеүсе дөйөмләшеүҙең, ғөмүмләшеүҙең ҡотолғоһоҙ бер күренеше ул глобалләшеү. Унан ошо йомран ише үҙ өңөнә, ауылыңа, йортоңа инеп боҫоп, урмантауҙарға ҡасып ҡына ҡотолоп булмаяҫаҡ. Уралтауҙа кеше аяғы баҫмаған төпкөлдәр күп күплеккә, әммә глобалләшеүҙән улар ҙа милләтебеҙҙе һаҡлай алмаясаҡ. Глобалләшеүгә бары тик милли рухыбыҙҙы хасил иткән берҙәмлегебеҙҙе генә ҡалҡан итеп ҡуя алабыҙ. Йомран ише боҫоп түгел, тиндәр араһында тин булып. Оло донъяла барған глобалләшеү беҙҙең милләт өсөн бер йоҙроҡҡа тупланыуҙы аңлатырға тейеш, йәғни беҙ глобалләшеүҙе үҙебеҙҙең милләт өсөн хеҙмәт иттерергә, уның берләшеү, тупланыу идеяһын үҙебеҙгә һендерергә бурыслыбыҙ. Глобалләшеү - монгол сиреүе, шул уҡ ваҡытта уға ҡаршы тороу өсөн беҙҙе ойоштороусы, сәмләндереүсе сәбәп тә.

Рухты, асылды һаҡлауҙың иң дөрөҫ юлы - ҡандаштарың, рухташтарың, диндәштәрең менән бергә булыу. Мине тәрән уйға һалғаны шул булды: ни өсөн берәүҙәрҙең берләшеүе, тупланыу икенселәрҙе айыра икән? Донъяла һибелеп йәшәүсе милләттәр глобалләшеү шарттарында бер йоҙроҡҡа тупланып, ойошоп, һаҡланыу саралары эҙләгәндә, беҙ ошо йомран ише үҙ оялырыбыҙға сумыуҙы хуп күрәбеҙ. Бары тик ҡоролтайҙар, йыйындар үткәндә генә осрашабыҙ. Ошо йомран хәленә ҡалмайыҡ, тиеүем.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

***Хөрмәтле милләттәштәр! 2010 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тамамлана. Хаҡтар: 50665 индексы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 354 һум 24 тин.***

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы дауам итә.**

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, тыуған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

**Тағы бер тәҡдим бар...**

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфө-матбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, ярты йылға **270 һум**.
- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзанараҡ: ярты йылға - **225 һум**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Тәтешле районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев үткәргән кәңәшмәлә ҡоролоҡ мәсьәләһе тураһында фекер алышынды. Билдәләнеүенсә, республиканың 36 районында күҙәтелә быйыл ҡоролоҡ, күп йыллыҡ үләндәр сәсеүлектәре, йәшел аҙыҡ бик ныҡ зыян күргән. 952 мең га майҙанда ауыл хужалығы культуралары юҡҡа сыҡҡан. 6,4 млрд һумлыҡ зыян күрелгән. Кисекмәҫтән ерҙе һәм сәсеүлектәрҙе саранчаларға ҡаршы эшкәртергә лә кәрәк.

✓Ҡыйғы муниципаль районы хакимиәте башлығы Мәҡсуд Латипов икенсе эшкә күсеү сәбәпле вазифаһынан бушатылды. Әлегә был вазифаны үтәү бурысы ваҡытлыса Наил Ибраһимовҡа йөкмәтелде.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән шағир Абдулхаҡ Игебаевҡа "Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы" тигән маҡтаулы исем бирелде.

✓РФ Наркотиктар әйләнешен контроллау буйынса федераль хеҙмәтенең БР идаралығында билдәләнеүенсә, наркотик матдәләрҙең законһыҙ әйләнешенә ҡаршы һөҙөмтәле эштәр алып барыу арҡаһында республикала героин таралыу сикләнгән. Уның ҡарауы, төбәктә ҡайһы бер дарыу препараттарынан әҙерләнеүсе һәм йәшерен әйләнештәге дезоморфин киң тарала бара. Дезоморфин - үтә хәүефле матдә. Был матдәгә ултырғандарҙың организмы бер йыл эсендә ҡаҡшай. Уны юҡҡа ғына теге донъяға тура юл, тип атамайҙар.

✓Рәсәйҙең баш санитар табибы Геннадий Онищенко тәмәке менән алкоголгә хаҡтарҙы арттырыу кәрәклеген билдәләгән. Тәмәке хаҡтары күпме булаҫағы әлегә билдәһеҙ, ә бына бер шешә араҡының хаҡы тиҙҙән 420 һум тороуы мөмкин.

✓Әбйәлил районының Әлмөхәмәт дөйөм белем биреү мәктәбенә билдәле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы, публицист Рамазан Өмөтбаевтың исеме бирелде.

✓Салауат районында күренекле сәсән, импровизатор, шағир һәм бейеүсе Байыҡ Айҙарҙың тыуыуына 300 тулыуға арналған "Байыҡ йыйыны" фольклор байрамы булып үтте.

✓Республикала офтальмология буйынса халыҡ-ара конференция булып үтте. Унда Рәсәй, Бөйөк Британия, Германия һәм Японияның алдынғы белгестәре ҡатнашты.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ИҪКЕ АУЫҘҘАН... ИҪКЕ ҺҮҘ,

## йәки НТВ телекомпанияһы кем файҙаһына Башҡортостанға бысраҡ яға?




**Сенсация кәрәкме һеҙгә? Тыныс тормош ялҡыттымы? Күҙҙәрегеҙҙе сағылдырған, ҡолаҡтарығыҙҙы тондорған яңылыҡтар ишеткегеҙ киләме? Телевизорығыҙҙы тоҡандырығыҙ һәм үрҙә телгә алынған каналға рәхим итегеҙ. Унда бөгөн үлтереш, унда һуйыш, унда ҡан ҡойош. Был тормоштоң иң бысраҡ, иң әшәке, иң боҙоҡ яҡтарын, күренеп тормаһа- эҙләп табып, булмаһа- уйлап сығарып күрһәтәсәктәр һеҙгә. Ҡайҙа нимә янған, ҡайҙа кемде үлтергәндәр, ҡайҙа кемде, нисек итеп һәм нисә тапҡыр көсләгәндәр - был каналдың журналистары һәр ваҡыт шунда. Ҡолаҡты ярғыс тауыш менән ҡысҡыра-ҡысҡыра, төкөрөктәрен сәсә- сәсә, үҙҙәренең "талант"тарына үҙҙәре тамшана-тамшана, улар һеҙгә иҫ китмәле "яңылыҡтар" һөйләйәсәк, кеҫә телефоны ярҙамында төшөрөлгән "эксклюзив" кадрҙар менән "ҡыуандырасаҡ". Һәм, әлбиттә, аҡыллы һәм белдекле ҡиәфәт менән илдәге һәм донъялағы сәйәсәт хаҡында бәйән итәсәктәр. Ул хәбәрҙәрҙең ҡайныһыһы дөрөҫ, ә ҡайһыныһы ялған - ҡапыл ғына әйтеп тә булмай. Бигерәк ышандыралар. Күҙҙәрен дә йоммайҙар. Хас та Геббельс кеүек. Ялған ни тиклем ҡот осҡос, шул хәтлем ышандырырлыҡ яңғырай, тигәнме әле ул?**

Үткән аҙнала Башҡортостан хаҡында һөйләп... аптыраттылар тип әйтеп булмай. Ундай ғына хәбәрҙәргә күнеккәнбеҙ. Шомландырҙылар, тиергә лә ярамай. Мин, мәҫәлән, уларҙың һөйләгәндәренән бер ниндәй ҙә шом һиҙмәнем. "Ҡыуандырҙылар" тигән һүҙ тап килә, шикелле. Эйе, ҡыуандырҙылар. Уларҙы ҡыуанып ҡараным. Ғәжәпләнәһегеҙме, йәмәғәт? Уларҙың сюжеттарында ҡыуанырлыҡ бер генә нәмә юҡ та баһа, тиһегеҙме? Яңылышаһығыҙ. Беҙҙе иҫкә төшөргәндәр икән, тимәк, беҙ - бар, беҙ - йәшәйбеҙ. Үҙәк телеканалдары эфирында, йәки гәзиттәре биттәрендә республикабыҙ хаҡында бер нәмә лә һөйләмәй һәм яҙмай башлаһалар, шул саҡта ҡурҡырға, шул саҡта шомланырға кәрәк. Тимәк, Башҡортостан юҡҡа сыҡҡан. Йәки, улар теләгәнсә, Өфө губернаһынамы шунда, йәки Урал буйы крайынамы, әүерелгән. Ә әлегә, картала башҡорт халҡының тыуған төйәге Башҡортостан Республикаһы тигән административ-территориаль берәмек булған саҡта, улар беҙгә тынғы бирмәйәсәк.

Хәйер, мауығыбыраҡ киттем шикелле. Булмаһа, үткән аҙнала, әлеге лә баяғы телеканалдан күрһәтелгән сюжеттарға әйләнеп ҡайтайыҡ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ул материалдарға мин заказ биргән булһам, башҡарыусыларға бер тин дә түләмәҫ инем. Бигерәк бер ҡатлы, ябай һәм наҙандарса эшләнгән. Тәүҙә, "Максимум" программаһында үткәне, айырыуса. Инде нисәмә йылдар буйына ҡабатланып килгән бер үк кешеләр, бер үк һүҙҙәр, бер үк кадрҙар. Үҙҙәрен "оппозиция" тип иғлан итеүҙән тәм табыусы өс-дүрт кеше. Береһе, үҙэшмәкәр "тарихсы" һәм булдыҡһыҙ эшҡыуар, күрәһең, күп йыуыуҙан һуҙылып, лапшайып торған иҫке генә футболкаһы менән йәмһеҙ булып упайып сығып торған ҡорһағын йәшерергә маташа. Икенселәре, әллә үҙәк телеканал журналисы менән осрашыуҙан үтә ныҡ тулҡынланғандар - алдан һөйләшеп, ниндәй һандар тураһында һүҙ алып барырға килешеп ҡуйырға ла оноҡҡандар һымаҡ, береһен-береһе бүлдергән булып ҡыланалар. Ә үҙен "берләшкән оппозиция башлығы" тип атаусы һаман да төҙөп бөтөрә алмай ташлап ҡуйған бинаны "Башҡортостан властары емергән татар гимназияһы" тип кемдеңдер күҙен буярға маташа.

Быларға ышанырға мөмкинме һуң? Беҙ бит глобаль мәғлүмәтелелек заманында йәшәйбеҙ. Интернетты асып ҡына ҡарағыҙ. Башҡортостан хаҡында меңәрләгән сайтта ынғай мәғлүмәттәр шунда уҡ табыла. Ә быларҙың ялғанын бер генә сайт та ҡабатлап күсереп баҫманы. Тимәк, ҡыҙыҡ түгел. Һәм Башҡортостан тураһындағы туҙға ла яҙып булмаған хәбәрҙәр берәүгә лә кәрәк түгел.

Шул уҡ көндө шул уҡ каналда икенсе сюжет донъя күрҙе. Уныһы инде "ЧП" (Черезвычайные происшествия"), йәғни "Ғәҙәттән тыш хәлдәр" тапшырыуында. Ниндәй ғәҙәттән тыш хәл булған икән беҙҙең республикала, тигән уй килде шунда уҡ башҡа. Баҡтиһәң, Өфөлә йәшәүсе һуғыш ветераны прокуратураға ғариза яҙған. Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын байрам иткән көндәрҙә уның торлаҡ шарттарын яҡшыртыу сираты уға барып етмәгән икән. Был, әлбиттә, иҫ китмәле хәл. Хатта ҡот осорлоҡ, сәстәр үрә торорлоҡ. Әлбиттә, хәбәр дөрөҫ була ҡалһа. Мин шунда уҡ орденмиҙалдарын зыңғырлатып, урамда эскәмйәлә иҫке гәзиттәр түшәп йоҡлап йөрөгән ҡарт ветеранды күҙ алдына баҫтырҙым. Күҙҙәремдән йәштәр атылып сыҡты хатта. Ҡарайым, ветеранкбыҙ бер ҙә асарбаҡҡа оҡшамаған. Ул ҡыҙы һәм кейәүе менән бергә тыныс ҡына йәшәп ята. Прокуратураға ғариза яҙыу тураһында уйлап та бирмәй. Көндәрҙән береһендә уларҙың фатирының ишегенә бер "журналист" шаҡылдатмаһа, улар артабан да тыныс ҡына йәшәгән булырҙар ине. "Журналист" һүҙен тырнаҡ эсенә алыуыма иғтибар иткәнһегеҙҙер. Был осраҡта ул кеше ваҡытлы матбуғат саралары хеҙмәткәре булыуҙан бигерәк, провокатор, йәғни башҡаларҙы ниндәйҙер ҡырын эшкә этәреп файҙа күреүсе булараҡ сығыш яһай. 90 йәшкә етеп барған ветеран ни өсөн уны видеокамераға төшөрөүҙәрен, төпсөнөп һорашыуҙарын, машинаға ултыртып прокуратураға алып барыуҙарын, әйтеп тороп (!) ғариза яҙҙырыуҙарын аңлап та етмәгән. Ошонда ҡул ҡуйығыҙ, тигәс, ҡуйҙым инде, ти. Ветеранға тыныслыҡ кәрәк, уны бимазаламаһалар, шул етте. Һөҙөмтәлә, тотош республикаға, уның етәксеһенә бысраҡ яғыла. Ҡайһы саҡта беҙҙең тыныс йәшәү теләгебеҙ ниндәй шау-шыу тыуҙырыуын белһәк, ҡул ҡуйыр, тауыш бирер, баш эйер алдынан, тәүҙә ҡырҡ тапҡыр уйлар инек.

Башҡарыусыларҙы беләбеҙ. Улар боҫоп ятмай. "Кемгә кәрәк был ғауға?" тигән һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ. Быға тиклем ошондай сюжеттарҙы, фотоһүрәттәрҙе, ошондай уҡ боҙоҡлоҡто, ялғанды һәм алдаҡты беҙ 2003 йылда үткән президент һайлауҙары мәлендә күргәйнек инде. Хәҙер иһә беҙ президентыбыҙҙы һайлап ҡуйыуҙан мәхрүм ителгәнбеҙ. Өҫтән кемде тәҡдим итәләр, урындағы депутаттар шуны раҫларға мәжбүр. Юғиһә, уларҙы таратып ебәреү өсөн күп кәрәкмәй. Йәғни, халыҡ бер ни ҙә эшләй алмай булып сығамы? Әлбиттә, юҡ. Беҙҙең тауыш күтәрергә, әйтергә, ризалашмаҫҡа хаҡыбыҙ һәм хоҡуғыбыҙ бар. Июнь айында Өфөлә үткән Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы быны тағы ла бер тапҡыр раҫланы. Беҙ унда әлегә Рәсәй Федерацияһының төбәктәргә ҡарата булған кадрҙар сәйәсәте менән риза булмауыбыҙ хаҡында асыҡтан-асыҡ үҙ позициябыҙҙы белдерҙек. Республикабыҙҙы яттарға бирмәйәсәгебеҙ хаҡында әйттек. Аҡыллы хужа иң тыңлауҫан атты ла туҡтаусыҙ ҡыуһаң, туҡмаһаң, ашатмаһаң һәм ял иттермәһәң, ул тулай башлағанын, хатта тәртәне һындырғанын яҡшы беләә. Ә беҙ бит хайуан түгел. Беҙ ошо илдең граждандары. Тимәк, тотош бер төбәкте, ябай ғына итеп әйткәндә, туңҡайтып ҡуйыу - илдең именлегенә ҡаршы сығыусыларға, Рәсәйҙе тарҡатыуҙы ниәт итеүселәргә кәрәк.

Әйтергә кәрәк, Рәсәй халҡы Башҡортостан тураһындағы килделе-киттеле мәғлүмәткә бер ни тиклем өйрәнеп тә бөткән, шикелле. Башҡа төбәктәрҙә йәшәүселәр ҙә бит ваҡытында ошондай уҡ "бысраҡ мәғлүмәт" ағымына дусар ителгәйне. Улар хәҙер һәр бер хәбәргә тәңҡит күҙлегенән ҡарай. Ә быны сит ил кешеләре, айырыуса Рәсәй Федерацияһының иҡтисадин үҫтереүгә үҙ аҡсаларын индерергә теләүселәр, бындай мәғлүмәткә эйә булһа, улар Президент Дмитрий Анатольевич Медведев иғлан иткән модернизациянан, янсыҡтарын нығыраҡ ҡымтып, табандарын ялтыратып ҡасасаҡ. Тимәк, Башҡортостан тураһында ғәйбәт һатыусылар Рәсәйҙең үҙенә лә зыян килтерә булып сыға.

Башҡортостанға ҡаршы асылған мәғлүмәт "һуғышы"-ның тәүге ударҙарын йәмғиәтебеҙ тыныс ҡына кисерҙе. Ялғанға ҡарата үҙенсәлекле иммунитетыбыҙ барлыҡҡа килгән, ахыры. Әммә "һуғыш" ошоноң менән генә тамамланыр, тип өмөтләнергә ярамай. Ҡарайыҡ әле, беҙҙең хаҡта тағы ла ҡайһы мөйөштән ни тип ҡысҡырырҙар икән?

**Таһир ИШКИНИН.**

**Әйткәндәй, был мәҡәләне өҫтә әйтелгән телеканалға реклама тип ҡабул итеп ҡуймағыҙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы Марсель Ҡотоев Хакасия баш ҡалаһы Абаканда үткән "От Ыры" ("Ут йыры") Бөтә Рәсәй этник эстрада музыка конкурсы-фестиваленең гран-прийын яуланы.

✓Октябрьский ҡалаһында үткән X республика Ҡурай байрамында быйыл 19 район һәм 6 ҡаланан, шулай уҡ Силәбе һәм Ырымбур өлкәләренән 232 кеше көс һынашты. Конкурсанттарҙы Юлай Ғәйнетдинов, Азат Айытколов, Мөхәмәт Түләбәев кеүек билдәле ҡурайсылар баһаланы. Гран-приға Сибай ҡалаһынан Нургәле Кейекбирҙин лайыҡ булды. Уға конкурстың төп бүләге - "ВАЗ-2107" автомобиле тапшырылды. "16 йәшкә тиклемге яңғыҙ башҡарыусылар" араһынан Өфөнән Арыҫлан Оморҙаҡов, 16 йәштән өлкәнерәктәр араһынан Дүртөйләнән Инсур Йосопов еңеү яуланы.

✓Баш ҡаланың Орджоникидзе районында халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында эшләү өсөн хеҙмәткәрҙәр йыйыу дауам итә. Әҙерлек планына ярашлы 2010 йылдың 1 августына тиклем бөтә эшселәр ҙә ҡабул ителеп бөтөргә тейеш. Районда 27 һанау участкаһы ойоштоpола, унда 106 инструктор 4 октябрҙән алып 31 көн эшләйәсәк һәм 425 һанаусы 8 октябрҙән алып 22 көнгә ҡабул ителә. Резервты ла иҫәпкә алып, Орджоникидзе районына барлығы 761 кеше был эшкә талап ителә. Улар граждандыҡ-хоҡуҡи килешеүгә ярашлы ҡабул ителә һәм махсус әҙерлек үтәсәк.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актерҙарының береһе - Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшев "Әхмәтзәки Вәлиди" спектаклендәге Ататөрк роле өсөн Исмәт Көнтәй исемендәге төрөк театры премияһына лайыҡ булды. Билдәле төрөк яҙыусыһы һәм драматургы Исмәт Көнтәй исемендәге был премия 35 йыл дауамында төрөк театр донъяһының иң яҡшы вәкилдәренә бирелә. Быйыл ул беренсе тапҡыр сит ил вәкиленә бирелде.

✓Рәсәйҙә барлығы 2,8 миллион кеше социаль пенсия ала. 1июлдән соцпенсияларҙы 3,5 процентҡа, яҡынса 157 һумға арттырмаҡсылар. 1 апрелдән пенсиялар 8,8 процентҡа индексацияланғайны инде.

✓Белорет егете Азамат Бикбаев грекрим көрәше буйынса Рәсәй чемпионатында еңеүсе булды.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ТАҒЫ СПОРТ ҮҘӘГЕ

**Киләһе йыл Өфөлә параолимпия уйынсыларын әҙерләүсе үҙәк төҙөлә башлаясаҡ. Унда мөмкинлектәре сикләнгән спортсылар ғына түгел, бөтә өфөлөләр ҙә шөғөлләнә аласаҡ.**

Үҙәк Затонда урынлашасаҡ комплекстың макеты әҙер, уның дөйөм майҙаны 30,2 мең квадрат метр. Комплекстың бар биналары ла мөмкинлектәре сикләнгән спортсыларға уңайлы итеп төҙөләсәк. Был Үҙәктә республика, Рәсәй һәм Европа кимәлендәге ярыштар үткәреү ҙә ҡаралған. Бынан тыш, спорт комплексында 1500 тамашасыға иҫәпләнгән мини футбол, волейбол, фехтование, бокс, бадминтон, көрәштең бөтә төрҙәре буйынса чемпионаттар үткәреү өсөн универсаль спорт залы; бокс, ауыр атлетика, фехтование, ҙур теннис буйынса тренировкалар өсөн трансформалап була торған күп функциялы зал; ике бассейн, судьялар аппаратураһы, электрон табло, 300 кешегә иҫәпләнгән трибунаһы булған зал; йүгереү юлдары, массаж кабинеттары, сауна бүлмәләре, ҡунаҡхана урынлашасаҡ.

## ТОРЛАҠ АРЗАН

**Бөгөнгө көндә Өфөлә икенсел торлаҡ баҙарында күсемһеҙ милеккә уртаса хаҡ - квадратына 41,62 мең һум. Һуңғы аҙнала ул уртаса 0,3 процентҡа түбәнәйгән.**

Бер бүлмәле фатирға хаҡ - 0,1 (квадраты 43,65 мең), ике бүлмәлегә - 0,2 (41,71 мең), өс бүлмәлеһенә 0,3 (39,94) процентҡа түбәнәйеү күҙәтелә. Элиталы торлаҡ иң ҡиммәте - 1 квадраты 57,6 мең һум.

"Эксперт" күсемһеҙ милек агентлығы селтәре хәбәр итеүенсә, баш ҡалала иң осһоҙ фатир 1 миллион тора, иң ҡыйбаты - 18,5 миллион һум. 9,9-25 квадратлы бүлмәләрҙең хаҡы - 500 мең дән 960 мең һумға тиклем. Бөгөнгө көндә һатыуға ҡуйылған иң ҡыйбатлы коттедж 18 миллион һум тора.

## ХӘҮЕФҺЕҘ ТРАНСПОРТ

**Республикала лицензияланған автомобиль транспорты ҡатнашлығындағы юл-транспорт фажиғәләре һаны кәмей бара.**

Башҡортостан республикаһының автомобиль-юл күҙәтеүе дәүләт идаралығы белдереүенсә, һуңғы биш йыл эсендә Волга буйы федераль округында Башҡортостан лицензияланған автомобиль транспортында пассажирҙар йөрөтөү хәүефһеҙлеге буйынса икенсе урынға сыҡҡан. Республика быйдай күрһәткескә пассажир автотранспортының был төрө ҡатнашлығында юлтранспорт фажиғәләренең 11 процентҡа кәмеүе һөҙөмтәһендә өлгәшә алған.

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Был аҙнала Башҡортостан мәктәптәрендә 27 меңдән ашыу уҡыусы өсөн сығарылыш кисәләре уҙҙы. Баш ҡаланың дөйөм белем биреү мәктәптәрендә быйыл 9-сы синыфты - 9313, 11-се синыфты 3893 уҡыусы тамамлай.**

# ҺАУ БУЛ, МӘКТӘП,

## һаумы, оло тормош!



Дөйөм алғанда, Өфө мәктәптәре өсөн уҡыу йылы бик уңышлы булды. Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре лә насар түгел, киреһенсә, ҡайһы бер мәктәп уҡыусылары уны юғары балдарға тапшыра алды. Мәҫәлән, милли мәктәптәр араһынан 20-се ҡала башҡорт гимназияһы, 136-сы башҡорт лицейы, 158-се башҡорт гимназияһы, 140-сы башҡорт гимназияһы уҡыусылары төп фәндәрҙән генә түгел, ә физика, информатика, тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, инглиз һәм башҡорт теленән дә юғары уҡыу йортона уҡырға инеү өсөн кәрәкле балдарҙы йыя алды. Ҡалала мәктәпте алтын миҙалға - 103, көмөш миҙалға 225 бала тамамлаған.

Ә Дим районы хакимиәте, йылдағыса, сығарылыш синыф уҡыусыларын ҡотлау өсөн Ленин майҙанында йыйылғайны. Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Бикмер улы Баязитовтың хаҡлы билдәләүенсә, Дим районының үҙенә генә хас традициялары, ғөрөф-ғәҙәттәре бар. "Баш ҡаланың йәшеллеккә күмелгән матур бер өлөшө булған был район халҡы мәктәпте тамамлаусыларҙы ла оло юлға, алға, яҡты киләсәккә бергәләп оҙата, улар менән бергә шатлана, көйөнә. Тантананың төрлө сағыу төҫтәре лә, уның йөкмәткеһе лә, халыҡтың ошо байрамға мөнәсәбәте лә күңелдә матур тойғолар уята", - тине ул димдәрҙең был инициативаһын хуплап.

Димдә урынлашҡан ете дөйөм белем биреү мәктәбен быйыл 262 уҡыусы, 13-ө алтын һәм 11-е көмөш миҙалға тамамлай. Райондағы берҙән-бер 102-се башҡорт гимназияһы уҡыусылары ла һынатмаған, 12 сығарылыш уҡыусыһы ла БДИ-ны уңышлы тапшырып, барыһы ла ҡулына өлгөргәнлек аттестаты алыуға өлгәшкән.

"Беҙ һәр уҡыусыны йөҙгә таныйбыҙ, исемләп beләбеҙ, яратабыҙ", - тигәйне район хакимиәтенең мәғариф бүлеге хеҙмәткәрҙәре. Ошо күркәм сарала бының ысынлап та шулай булыуына шаһит булынды. Бер тынала үткән шатлыҡлы ла, моңһоу ҙа тантана уҡыусыларҙың, уҡытыусыларҙың теләге һәм ынтылыштарының бер булыуының һәм үҙ-ара аңлашып эшләүенең һөҙөмтәһе ине. "Бөгөн йәш кешегә үҙенең һәләттәрен, иң ҡыйыу теләктәрен тормошҡа ашырыу өсөн бөтә шарттар бар. Барлыҡ хыялдарығыҙ ысынбарлыҡҡа әүерелһен өсөн һеҙгә дөрөҫ юл һайларға ғына кәрәк", - тип, уҡыусыларға үҙенең фатихаһын бирҙе район етәксеһе Зөлфәр Ҡасим улы Хәкимов та.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәктәпте тамамлап, ҡулға өлгөргәнлек аттестаты алыу көтөп алынған байрам булһа ла, был көндө һәр сығарылыш уҡыусыһының күҙендә ғәмһеҙ бала саҡ менән хушлашыу һағышы ла сағылмай ҡалманы. Димдәрҙең зәңгәр күккә осорған аҡ елкәнле карабы бала саҡ хыялдары ғына түгел, ә киләсәккә ынтылыш символын да кәүҙәләндерҙе һәм сығарылыш уҡыусыһын тормоштоң артабанғы баҫҡыстарын яулау өсөн еңел булмаған юлға әйҙәне. Тимәк, беҙ был буласаҡ төҙөүселәр, нефтселәр, табиптар, уҡытыусылар тураһында тағы ла тағы яҡшы һүҙҙәр ишетеп, шатланасаҡбыҙ әле.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

## МӘҢГЕЛЕК ХӘТЕР

**1941 йылдың 22 июне, Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн - Рәсәйҙә иң моңһоу даталарҙың береһе. Хәҙер беҙ йыл да был көндө Тыуған ил өсөн яуҙа, фашист тотҡонлоғонда һәләк булыусыларҙы, тылда үлеүселәрҙе хәтергә алыу көнө итеп билдәләйбеҙ. Был юлы ла Өфөнөң Еңеү паркында Хәтер һәм ҡорбандарҙы иҫкә алыу көнөнә арналған тантаналы сара уҙҙы. Унда Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандары, власть органдары һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, республиканың Эҙләү отрядтары фонды һалдаттары ҡатнашты.**

Өфө ҡалаһы округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов 69 йыл элек башланған һуғышты кешелек тарихында миллионлаған яҙмышты селпәрәмә килтергән һәм миллионлаған кешенең ғүмерен ҡыйған иң рәхимһеҙе, тип атаны. Был һуғыш әле ҡағылмаған бер ғаилә лә юҡ арабыҙҙа. Башҡортостандан һуғышҡа китеүсе 700 мең кешенең 200 меңдән ашыуы орден һәм миҙалдар менән бүләкләнгән. 278 кеше Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған, 35 кеше Дан орденының тулы кавалеры. Йөҙәрләгән тыл хеҙмәтсәндәренә ордендар тапшырылған, 420 кеше "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышындағы фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән.

- Бөгөнгө быуын Бөйөк Ватан һуғышын китаптарҙан ғына түгел, ә атай-олатайҙар һөйләүенән, уларҙың үҙҙәрен иһә - миҙалдары һәм ордендары, һәйкәлдәр һәм обелискылар аша яҡшы белә, - тине Сынтимер Биктимер улы үҙенең сығышында.- 1418 көн дауам иткән һуғыштың һәр көнө ҡыйыулыҡ, ауыр хеҙмәт, кире ҡайтарып булмаҫлыҡ юғалтыуҙар һәм, әлбиттә, еңеүгә булған ышаныс менән үтә. Беҙ һәләк булғандар алдында башыбыҙҙы эйәбеҙ. Геройҙарға мәңгелек хәтер!

Митингыла билдәләнелеүенсә, Башҡортостандан ғына 127 400 яугир һуғышта хәбәрһеҙ юғалған, уларҙың ҡайһыларының яҙмышы бөгөн дә билдәле түгел. Әммә республиканың эҙләү отрядтары был юҫыҡта күп эш башҡара. Сарала Октябрскийҙағы "Йәшә, Ер!" эҙләү отряды етәксеһе Рауил Кашапов Балаҡатай районы һалдаты Ғәйфулла Ғизәтуллиндың медальонын уның туғаны - Өфө урман хужалығы техникумы студенты Вәғиз Дилмөхәмәтовҡа, ә Нуриман эҙәрмәндәре Кушнаренко районы һалдаты Миңлемулла Ғәзизовтың документтарын уның улына тапшырҙы.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Йыл башынан алып баш ҡала округы хакимиәтенең "Кайнар пейджер"ына 892 мөрәжәғәт ҡабул ителгән. Торлаҡ йорттарҙы ремонтлау һәм хеҙмәтләндереү иң актуаль мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала. Ихаталарҙы тәртипкә килтереү буйынса мөрәжәғәттәр икенсе урында тора. Ҡаланы төҙөкләндереү һәм транспорт мәсьәләләре тураһында ла шылтыратыуҙар арҡған.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлау тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, баш ҡала 2008 һәм 2009 йылдарҙа Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалауға булышлыҡ итеү фондынан 2 млрд һум тирәһе аҡса алған. Бынан тыш, был эштәр өсөн баш ҡала бюджетынан да байтаҡ аҡса бүленгән. Өфөлә ошолар иҫәбенә 377 йорт ремонтланған. 110 меңдән ашыу кеше үҙенең торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан.

✓Өфөлә уртаса эш хаҡы быйыл беренсе кварталда 20352 һум тәшкил иткән, был былтырғы менән сағыштырғанда күберәк. Ә республика буйынса уртаса эш хаҡы 15695 һум. Иң күп эш хаҡы алыусылар файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу өлкәһендә - унда уртаса 60600 һум алалар. Ә иң түбән эш хаҡы - мәғарифта, шулай уҡ ҡунаҡхана һәм ресторан бизнесында.

✓Талпан ҡаҙалыу ҡурҡынысы дауам итә. Әле республиканың дауалау учреждениеларына талпан ҡаҙалған 11254 кеше мөрәжәғәт иткән. Ҡаҙалған талпандарға махсус тикшереү үткәргәндән һуң, улар араһында талпан вирусы йөрөткәндәре лә булыуы асыҡланған. Талпан ҡаҙалған осраҡта өфөлөләр уны иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем Шәфиев урамы, 7 адресы буйынса тикшереүгә алып бара ала.

✓Өфөлә әкрынлап булһа ла эшһеҙлек кәмей бара. 1 июндән эшһеҙлек кимәле 2,1 процент тәшкил иткән. Элекке йылдарға ҡарағанда эш хаҡын тотҡарлауҙар ҙа осрамай тиерлек.

✓Йәмғиәтте өйрәнеү фәнен республикала 11382 бала тапшырған. Уртаса балл 57,8 булған. 244 бала был балл сигенә етә алмаған.

✓ Кис етһә, мине ихата уртаһындағы усаҡлыҡҡа индереп бикләйҙәр ҙә, эттәрҙе ысҡындырып ебәрәләр. Төндә ихата эсенә сығып аяҡ баҫырлыҡ түгел, алабайҙар шундуҡ килеп йәбешә.






## ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Сәй эсеү ҡағиҙәләре

● Сәйҙең иң файҙалы өлөшө һыуынғандан һуң бөтә. Шуның өсөн сынаяҡҡа һалғандан һуң өсдүрт минуттан да артыҡ тотмай эсегеҙ, тулыһынса һыуынғанын көтмәгеҙ. Бик ҡайнар сағында ла эсергә башламағыҙ.

● Ҡунаҡта булһағыҙ, сәй янындағы бал менән ҡайнатманы ҡатыҡ ашаған шикелле ашамағыҙ. Ҡалаҡ тултырып алмағыҙ. Ашъяулыҡҡа тамыҙмағыҙ. Әҙерләнгән булһа, ваҡ һауыттарға бүлеп алығыҙ. Әҙерләнмәһә, ҡалаҡ менән тамыҙмаҫлыҡ итеп кенә алығыҙ.

● Сәй янына күбеһе матурлыҡ өсөн ҡуйылған нәмәләрҙе ҡунаҡҡа барған ваҡытта икмәк урынына ашамағыҙ. Махсус ашар өсөн генә ҡуйылғандарын ашағыҙ һәм башҡаларын һаҡлыҡ менән алығыҙ.

● Сәй янында ҡаймаҡ һәм майлы аштар булһа, кейемдәрегеҙгә тамыҙмағыҙ. Ҡулдарығыҙҙы майламағыҙ. Майлы ҡулдарығыҙҙы кейемдәрегеҙгә һәм ситектәрегеҙгә һөртмәгеҙ. Һәр ваҡыт таҙа һәм саф булығыҙ.

### Кейем ҡағиҙәләре

● Тәрбиәһеҙлеккә һәм исраф итеүселеккә хас булған кейемдәрҙе киймәгеҙ. Халыҡ алдында әйбәт сифатлы, ят һәм көлкөлө булмаған, оҙон ғүмерле кейемдәрҙе кейергә һайлағыҙ. Кейем өсөн бәрәү менән дә ярышмағыҙ. Кейем өсөн кеше менән ярышыу оло бәлә икәнен белеп тороғоҙ.

● Кейемдәрегеҙҙе керле йөрөтмәгеҙ. Халыҡ һөйләй тип, мода тураһында һөйләшмәгеҙ һәм модаға әсир булмағыҙ. Һәр кем хуш күргән ғәҙәти кейемдәрҙе кейеп, моданы үҙегеҙгә әсир итегеҙ.

● Үҙегеҙгә, хәл һәм дәрәжәгеҙгә тура килмәгән кейемдәрҙе, хатта ҡоҙрәтегеҙ етһә лә, киймәгеҙ. Бөйөк ғаиләләр һәм байҙар ғәҙәтенсә кейенергә көсәнмәгеҙ һәм ҡыҙыҡмағыҙ. Ҡыҙҙарҙың иң һөйкөмлө булғандары, ғәҙәти кейемдәрҙе саф һәм таҙа итеп кейгәндәрелер.

● Башҡаларҙың кейемдәрен киймәгеҙ. Мөмкин булһа, үҙ кейемдәрегеҙҙе башҡаларға кейҙермәгеҙ. Башҡаларҙың саф һәм таҙа кейемдәренә ҡыҙыҡмағыҙ. Үҙ кейемдәрегеҙҙе саф һәм таҙа йөрөтөгөҙ.

● Муйындарығыҙға көмөш тәңкәләр теҙелгән ҡамыт киймәгеҙ. Сәстәрегеҙгә ауыр сулпы һәм тәңкәләр таҡмағыҙ. Ашағанда ҡышҡы һәм тышҡы кейемдәрегеҙҙе һалып ултырығыҙ.

● Өҫтөгөҙҙән һалғандан һуң, бигерәк тә еүеш һәм бысранған кейемдәрегеҙҙе унда-бында ташламағыҙ. Тәртипләп һәм киптереп, билдәле урындарына ҡуйығыҙ.

### Биҙәнеү ҡағиҙәләре

● Ҡыҙҙарға биҙәнергә кәрәк, тип ғүмерегеҙҙе биҙәнеп үткәрмәгеҙ. Боттарға табыныусылар кеүек, тик көҙгө янында йөрөмәгеҙ. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың мөхәббәтләләре иң ябай һәм тәрбиәле булғандары икәнен белегеҙ.

● Сәләмәтлеккә зарары, дин һәм аҡылға хилаф булған биҙәнеүҙәрҙән йыраҡ тороғоҙ. Үҙегеҙгә етди һәм халыҡ араһында иғтибарлы итәсәк рәүештә мөләйем итеп биҙәнегеҙ.

● Әҙәпһеҙ ҡатындар кеүек, йөҙҙәрегеҙгә аҡ һәм ҡыҙыл буяуҙар һөртмәгеҙ. Ҡаштарығыҙҙы йолҡмағыҙ. Ҡаштарығыҙ һәм тештәрегеҙҙе ҡараға буямағыҙ.

● Беләктәрегеҙҙе, муйындарығыҙҙы һәм күкрәгегеҙҙе асыҡ йөрөтмәгеҙ. Сәстәрегеҙҙе һәм яланғас аяҡтарығыҙҙы ситтәргә күрһәтмәгеҙ. Бындай нәмәләргә мөбәрәк динебеҙҙең рөхсәте юҡ икәнен онотмағыҙ.

АҢ БУЛЫҒЫҘ!

**2004 йылдың көҙөндә беҙҙең гәзит редакцияһына Баймаҡтан шылтыратып, ошо райондан Салауат Әхмәтов атлы ир-уҙамандың ҡаҙаҡтарҙа әсирҙә булыуы, унан ҙур мөғжизә менән генә ҡотола алыуы хаҡында мәғлүмәт еткерҙеләр. Яңылыҡ, әлбиттә, сәстәр үрә торорлоҡ, уйҙарыңдан уйылып китерлек ине. Ҡапылғара ул саҡта: "Нисек инде, XXI быуат башында, туғандаш ҡаҙаҡ халҡының бер вәкилендә башҡорт кешеһе әсирҙә булырға тейеш һуң? Булмаҫтайҙы... Ҡаҙаҡтар менән элек-электән беҙҙең барымта-карымта мөнәсәбәте, ҡыҙ урлау, өйөр көтөү ҡыуып алып китеү хәлдәре булған-булыуға, хәҙер ҙә уларҙың сиктәш райондарҙа беҙҙең аттарҙы ҡыуып алып китеү осраҡтары бар. Яҡташыбыҙ - атаҡлы Ғабдулла ишан Сәйдиҙең нәҫелдәше булған Иршат атлы бер егет атай-олатайҙарыбыҙ йолаһына тоғро ҡалып, хатта ҡаҙаҡ ҡыҙын урлап алып ҡайтып, кәләшле лә булды. Бик матур йәшәп яталар. Әммә был тиклеме - кеше һынлы кешене әсиргә алыуҙары хаҡындағы хәбәр ялғандыр... " - тип тә уйланым. Бындай хәбәрҙе ҡыҙыҡһыныусан журналист ат башындай алтынға юлыҡҡандай ҡабул итеүсән. Мин, бигерәк тә ул ағайҙы электән белгән кеше буларақ, шундуҡ Баймаҡ яғына елдерҙем. Баймаҡ ҡалаһындағы уның йәшәгән өйөнә барҙым, баҡтиһәң, ағайым күптән унда йәшәмәй икән. Икенсе адрес буйынса юлландым, унһында ла тап итә алманым. Ҡаҙаҡтарҙың артынан юллап килеүенән ҡурҡып, ағай башҡа урында йәшеренеп йәшәйҙер, тип уйлап, өс көн буйына шул тирәлә көтөмләп йөрөнөм. Күренмәне. Аптырағас, уны тыуған ауылына барып эҙләп ҡараным. Унда ла эҙенә төшә алманым. Эҙләүҙәрем унан һуң да, әлеге көнгә тиклем дауам итте. Баймаҡ яғына юл төшкән һайын, Салауат ағайҙың туғандарына уны эҙләүем хаҡында еткереп торҙом. "Бирәм тигән ҡолома, сығарып ҡуйырмын юлына", тигәндәй, ул сәйер ваҡиғаға 6 йыл үткәс, яңыраҡ, 16 июнь көнө, Салауат ағай редакцияға үҙе килеп инде. Уға һәр урында ла минең үҙен эҙләүем хаҡында еткергәндәр икән. Әсиргә нисек төшөүе тураһында һорашҡайным, ул инәлтеп-нитеп торманы, бер тынала ни күргәндәрен һөйләне лә бирҙе.**

# АҠ САБАҠҠАЙ КЕҮЕК КИЛЕП ҠАПТЫМ...

## йәки Ҡаҙағстан тотҡоно Салауаттың күргәндәре



### Ваҡиға башы...

2004 йылдың октябрь айында Силәбе өлкәһенең бер районындағы "Калинин" тигән совхозында шабашкала йөрөнөк. Кәсебебеҙҙән ундыҡ, бер нисә кешегә мунса бураныҡ. Һәйбәт кенә итеп түләнеләр, шунан һуң бергә эшләп йөрөгән яҡташтарым Сибай яғына ҡайтып китте. Мин иһә, тағы ла әҙерәк аҡса эшләү маҡсаты менән уларҙан тороп ҡалдым. Шунан һуң бер үҙем тағы бер кешенең мунсаһын бурап бөтөрҙөм дә, хужа менән иҫәпләшкәс, көр күңел менән ҡайтырға сыҡтым. Байтаҡ ҡына аҡса туплап алдым. Минең бер сәйер ғәҙәтем бар: ҡалаға барған ауыл инәйҙәре кеүек, аҡсаны кеҫәгә түгел, ҡайҙалыр, кеше уйлап та бирмәгән урынға, төпкәрәк йәшереү ғәҙәте. Был юлы ла, нимәлер һиҙемләп, кеҫәгә юлға етерлек кенә аҡса ҡалдырҙым да, ҡалған егерме мең һумды носкиҙарым эсенә тығып ҡуйҙым. Шунан һуң үткән машиналарға "тауыш бирергә" тип, оло юл ситенә сығып баҫтым. Ҡулымдағы тоҡсайымдан балта, ҡул бысҡыһы һаптары күренеп тора. Шул саҡ янымa ҡара "Волга" килеп туктамаһынмы.

- Балта оҫтаһымы һин? - тип урыҫ телендә һораны машинаһынан төшкән алыптай кәүҙәле ҡаҙаҡ кешеһе.

- Эйе, - тинем мин уға бер ни булмағандай.

- Мунса бурай беләһеңме һуң? - ти теге ҡаҙаҡ мине баштан-аяҡ күҙ ҡарашы менән һынап ҡарап.

- Булдырабыҙ уны, һә, тигәнсе, - тигән булдым мин уға һыр бирмәҫкә тырышып.

- Улайһа, әйҙә, ултыр машинаға, киттек минә, бында яҡында ғына Ететау тигән урында йәшәйем. Мунсамды бурап бирерһең, һәйбәт кенә итеп үҙеңә түләрмен, ашатырмын, эсерермен, - тип теге мине дәртләндерә төштө.

Тәүәккәлләгән - таш ярған. Оҙаҡ уйлап торманым, ултырҙым да киттем. Бер аҙ барғас, юлдашыма:

- Ҡаҙағстан сиген нисек үтәбеҙ һуң, ағай, унда таможня, ә минең паспорт та, ғөмүмән, бер ниндәй ҙә документым юҡ, - тием.

- Борсолма, - тине ҡаҙаҡ миңә күҙ ҡыҫып, - бында беҙ барыһын да һатып алғанбыҙ...

Ысынлап та, таможняға барып еткәс, юлдашым хеҙмәткәрҙәргә: "Был кеше минең менән", - тине лә сик буйын үтеп тә киттек. Ететау тигән урында хәтһеҙ генә ваҡыт барҙыҡ. Мин сама менән ҡайтыр юлды ла үҙемсә билдәләп барам. Беҙҙе өс метр самаһы бейеклегендәге бетон ҡоймалар менән уратып алынған өс ҡатлы йорт ҡаршыланы. Ҡапҡаны ике бәнлеүән һаксы асып, машинаны ихатаға үткәрҙе. Килеп ингәс тә ихатаның бер мөйөшөндә өйөлөп ятҡан ҡарағай бүрәнәләргә иғтибар иттем.

-Бураған өсөн күпме түләрһең? - тип һорай ҡуйҙым машинанан төшкәс тә, хужаға йөҙөм менән боролоп.

-Һиңә тағы аҡса ла кәрәк булдымы? Тотторормон һиңә аҡса... Ана ята бүрәнәләр, хәҙер үк эшкә тотон, - тип аҡырҙы кинәт кенә дейеү ҡиәфәтенә ингән хужа.

Йырҙа әйтелгәнсә, "Аҡ сабаҡҡай кеүек..." ҡайҙа килеп ҡапҡанымды шундуҡ аңлап өлгөрҙөм. Ул арала хужаларының һүҙен ҡабатлап: "Һиңә тағы аҡса ла кәрәк булдымы?" - тип теге һаҡсылар миңә ташланды. Кеҫәмдә ятҡан юллыҡ аҡсамды тартып алдылар ҙа, килгәнемдән алып тәгәм дә ризыҡ ҡапмаған көйөмә эшкә тотонорға мәжбүр иттеләр. Баштан-аяҡ тентенеләр, тик носкийым эсенә күҙ һалырға баштары етмәне.

### Килька, икмәк, һыу...

Ашарға көнөнә бер буханка икмәк, арзанлы бер банка килька балығы, эсергә күпме теләйем, шунсама һыу биреп торҙолар. Меню шөптән түгел түгеллеккә, шул уҡ ваҡытта үлмәҫлек тә, йән аҫырарға була. Ҡоро икмәк тамаҡҡа һыйый, килька һыуһата, шулай булғас, көс куберәк һыуға төшә. Кис етһә, мине ихата уртаһындағы усаҡлыҡҡа индереп бикләйҙәр ҙә, эттәрҙе ысҡындырып ебәрәләр. Шунан һаҡсылар үҙ өйҙәренә ҡайтып китә. Төндә ихата эсенә сығып аяҡ баҫырлыҡ түгел, алабайҙар шундуҡ килеп йәбешә. Бер-ике мәртәбә ынтылып ҡараным да, бүтән тырышманым. Иртәнсәк һаҡсылар килеп

эттәрҙе бәйләгәс, мине тағы эшкә сығаралар.

Уйландым, уйландым да, хәйләгә барырға булдым. Аҡса ла түләнмәгәс, тинем үҙ-үҙемә, сама менән 5-6 көндә бурап бөтәрөрлөк мунсаның эшен оҙаҡҡа һуҙырға ҡарар иттем. Эске һиҙемләүем буйынса мунсаны тиҙ генә бурап бөтәрһәм, артабан хужа мине, артыҡ тамаҡты, берәй хәл эшләтеп ҡуйыр, тип ҡурҡтым. Ҡаҙаҡтарҙың бындай ғәҙәте барлығы хаҡында элек ишеткәнем дә бар ине. Етмәһә, был һиҙемләүемде хужаның килене берҙән-бер көндә раҫланы. Баҡтиһәң, был яҡтың ғәҙәте буйынса әсирҙе эшләтә-эшләтәләр ҙә, һуңынан унан ҡотолалар икән. Үҙемдең ашығып эшләмәүемә үҙем ҡыуанып, яйлап ҡуҙғалдым. Алдымда эшләр эшем бар икән, тимәк, мин йәшәйем, тигән һүҙ. Тик бына носкийым эсендә байтаҡ ҡына аҡса яткан көйгә килька, икмәк, һыу менән ултырыуы ғына ҡыйын...

### Әсирә килен

Күреп торам, быларҙың һары башлы килендәре һис кенә лә ҡаҙаҡ ҡыҙына оҡшамаған. Сираттағы энерҙә һаҡсылар ҡайтып киткәс, яйын килтереп, уның менән һөйләшә алдым. Баҡтиһәң, ҡаҙаҡ килене үҙебеҙҙең яҡтан, Сибайҙан булып сыҡты. Лилиә (билдәле сәбәптәр арҡаһында уның исемен үҙгәртеп алдым) бында үҙ ирке менән килен булып төшмәгән. Мин бер ни тиклем кимәлдә Лилиәнең яҙмышын ҡабатлағанмын. Ҡыҙ әхирәтенә барырға Сибайҙан сыҡҡан да, уны ошо Йомабай атлы ҡаҙаҡ алдатып ултыртып алып китеп, улына кәләш итеп биргән. Өс йыл үтеп, малайына ике йәш тулғас ҡына Йомабай Сибайҙағы ҡоҙа-ҡоҙағыйына барған. Өс йыл буйына Лилиәнең ата-әсәһе уны юғалтып, ҡайғы эсендә йәшәгән.

Яҡташым Лилиә менән дуҫлашып киттек. Ул миңә хужалар күрмәгәндә яйлап-яйлап ашарға ит, ҡаҙылыҡ, эсергә һөт бирә башланы. Тамаҡ туя башланы. Лилиә ошо йорттоң килене иҫәпләнһә лә, асылда, минең кеүек әсирә ине, бахыр. Бында йәшәүе лә шул балаһынан айырыла алмауға бәйле. Лилиә хужаның малдарын да ҡарай, йорт эсендә хужабикә эшен дә атҡара. Йомабай малды бик күп тота ине. Һәр хәлдә, малдары торған һарай эргәһенә самосвал менән килтереп ауҙарылған емдең ике көндә бөтөүе шул хаҡта һөйләй ине. Лилиә сыҡҡан һайын икешәр-икешәр күнәкләп һөт һауып индерә. Ул иртәнән-кискә тиклем һарайҙан сығышмай. "Улар һине хәлең бөткәнсе эшләтеп, һуңынан үлтереп, ергә күмеп ҡуясаҡтар. Үҙеңде бер кем дә эҙләп таба алмаясаҡ...", тине миңә бер көндә Лилиә.

### Ҡайтыу яғына юл...

Тоҡтонлоҡтағы 28 көнөм тулыуға, Йомабай улы менән Ҡустанай яғына юлланды. Ошо уңайлы мәлде бик оҙаҡ көткәнлектән, шундуҡ Лилиәнән мине ҡасырға ярҙам итеүен үтендем.

-Яҡташым, һеңлем, эттәрҙе генә бәйләп ҡуй ҙа, ҡапҡаны асып, мине сығарып ебәрсәле, зинһар, - тинем мин уға инәлеп. - Миңә ҡасыр өсөн бүтәнсә бындай уңайлы мәл сыҡмаясаҡ...

-Эй, ағай, мин үҙем дә шул хаҡта уйлап йөрөйөм. Тик һинә ҡасырға ярҙам иткәнемде белһәләр, миңә көн күрһәтмәйәсәктәр бит, - тине Лилиә.

-Һин бит әсәй кеше, ана, малайың бар, үҙҙәренең ҡаны булған баланы ҡарайһың, моғайын, үлтермәҫтәр, - тием.

...Төнгө икеләр тирәһендә Лилиә эттәрҙе бәйләне лә, ҡапҡаны асты. Ҡулыма ит, икмәк, һөт һалынған тоҡсай ҙа тотторҙо. 500 һум аҡса ла тәҡдим итте. Мин ул биргән аҡсанан баш тарттым. Ошоғаса аҡсамды носкийым эсендә һаҡлап килеүемде белгәс, ҡаҙаҡ килене тағы бер аптыраны. Мин юлланыр алдынан ул Сибайҙағы ата-әсәйҙәренең адресын бирип, уларға сәләм әйтергә ҡушты.

Тыуған яҡҡа йүнәлеште яҡынса белә инем инде. Дөм-ҡараңғы төндә тоҫмал менән дала буйлап атланым. Юлдан барырға ярамай, әҙләй сығып, кире тотоп алһалар, Лилиә әйткәнсә, иҫән ҡалдырмаясаҡтар, шуның өсөн юлдан ситтәрәк барырға тырыштым. Таң атып килгәндә, ултыртылған урманды аша сығыуға һыйырын ҡыуып ҡайтып барыусы урыҫҡа оҡшаған бер мужикты шәйләнем.

-Ниндәй өлкә ере был? - тип һораным мин унан, был ерҙең Ҡаҙағстандың ниндәй өлкәһе икәнен белергә теләп.

-Ырымбур өлкәһе, - тине миңә ҡарап аптыраулы ҡараш ташлаған мужик. - Кваркин районы...

Еңел булып китте. Урыҫты ҡосаҡлап алырҙай булдым. Ниндәй хәлгә тарығанымды һөйләп биргәйнем, урыҫ бот сапты.

-Күлдәк менән тыуғанһың һин, ул яҡҡа киткән кешеләр берәһе лә әйләнеп ҡайтмай, - тине ул.

Минең әсирлектән ҡотолоу шатлығымдың шойҡаны мужикка ла күсте. Шул саҡ мин, уның күңелен күрергә, үҙемдекенә йыйылған юшҡынды йыуырға теләп, уға аҡсам байтаҡ ҡына барлығын белдереп, магазин юлын һораным.

-Кәрәкмәй, башҡорт дуҫ, минең өйҙә бына тигәне бар, киттек миңә, станицаға... - тине лә, айвайға ҡуймай үҙенә алып ҡайтты.

Мужиктың ҡатыны ла бик ихлас булып сыҡты. Уға ла хәлемде һөйләп биргәйнем: "Эй, Аллам, һине бәләнән Хоҙай аралағандыр", - тип тиҙ арала йүгерә-йүгерә табын әҙерләне. Ашап-эсеп алғас, ҡатыны мунса яғып ебәрҙе. Мин ул арала станицалағы магазинға барып, хужаларға бүләккә күлдәк, тәм-том алып килдем.

-Нимәгә ул беҙгә, кәрәкмәй, - тине миңә ҡатын, бүләктәремдән һәм күстәнәстәремдән баш тартырға итеп.

-Мин бер үлемдән ҡалдым, ә һеҙ мине шул тиклем яҡшы ҡаршы алдығыҙ, беҙҙең башҡортта күстәнәс, бүләк биреше йола иҫәпләнә, - тигәс кенә тегеләр ҡаршылашманы.

Шунан һуң мунса төштөк. Бер аҙ хәл алғас, урыҫ мине алама ғына "Москвич" машинаһында үҙҙәренең район үҙәгенә алып барып ташланы. Унан автобусҡа ултырып - Ҡыҙылға, Ҡыҙылдан Сибайға килеп төшөп, иркен тын алдым.

### Һығымта

Тәүҙәрәк әсирҙә 28 көн, 28 төн ут йотҡан сағымды иҫләһәм, тәнем эселе-һыуыҡлы булып китә торғайны. Хәҙер инде әҙерәк һыуына төштөм. 28 тәүлек буйына килька ашай торғас, унан тамам бүктем, шунан бирле килькаға ҡарай ҙа алмайым. Шулай ҙа мин бер нәмәне яҡшы аңланым: беҙ хет үҙ илебеҙҙә, үҙ ауылыбыҙҙа, үҙ йортобоҙҙа йәшәһәк тә, бер бәләнән дә азат түгелбеҙ. Беҙҙе хатта закон да, дәүләт тә, милиция ла, суд та яҡлай алмай. Мине тағы ла Йомабайҙың башҡорт икәнлегемде белгәндән һуң бер бөртөк мыйығы ла ҡыймылдамауы аптыратты. Әлегерәк ололарҙың ҡаҙаҡтар менән нисек аралашып йәшәүебеҙ тураһында һөйләгәндәрен әкиәт итеп тыңлай торғайным. Баҡтиһәң, башҡорт менән ҡаҙаҡ мөнәсәбәте борон-борондан шулай сәйер булған икән. Ҡаҙағстан менән Башҡортостан араһына ҡуйылған Ырымбур кордоны Рус батшалығының ике халыҡты айырыу өсөн яһаған аҙымы булһа ла, мин тәүҙә ҡаҙаҡтарҙа әсир, аҙаҡ Ырымбур казағы тарафынан ҡунаҡ булып ҡабул ителгән башҡорт кешеһе булараҡ, был аҙымдың ике халыҡты айырыу сараһы ғына булмағанын да яҡшы аңлайым хәҙер. Совет осоронда Ҡаҙағстанда эшләгән күп кенә таныштарым, дуҫтарым, СССР тарҡалғас, унда йәшәгән йорттарын шул килеш ҡалдырып, өй йыһаздарын да һата алмай, ҡул һелтәп ҡасып ҡайтып килделәр. Был хәл дә беҙҙең ҡаҙаҡтар менән борон-борондан килгән сәйер мөнәсәбәттең дауамы тип аңларға булалыр. Әлбиттә, мин бында тотош ҡаҙаҡ халҡын ғәйепләмәйем. Яһилдар, әшәкеләр һәр халыҡта ла бар, шулай ҙа донъялар буталған ошондай ҡатмарлы заманда беҙ үткенселәрҙең һүҙенә ышанып, бер ҡатлы булмаһаҡ ине. Беҙҙе һемәйтергә әҙер тороусылар күп хәҙер. Беҙ тик үҙебеҙҙе үҙебеҙ генә һаҡлап ҡала алабыҙ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мин гәзит уҡыусыларға ағай был ваҡиғаны нисек итеп тасуирлаған, шул көйө һүҙмә-һүҙ еткерәм. Әлбиттә, мин бында ағайҙы урлаусы ҡаҙаҡты фашларға ла, ғөмүмән, ике туғандаш халыҡ араһын бутарға ла теләмәйем. Башта әйткәнемсә, беҙҙең халыҡтар араһындағы бындай мөнәсәбәттәр борон-борондан килгән, хәҙер инде йола кимәлендә ныҡыған һәм был өлкәлә Салауат ағай ҙа, мин дә "Америка аса" алмаҫбыҙ, бугай. Шулай ҙа күптәрҙе бер ҡатлылыҡтан, асығауыҙлыҡтан, үткенселәргә тиҙ ышанып барыусанлыҡтан, бер һүҙ менән әйткәндә, ыштаһыҙлыҡҡа тиң вайымһыҙлыҡтан, үҙ яҙмышыңа битарафлыҡтан иҫкәртке килә барыбер. Тап шуның арҡаһында күп кенә ҡиммәттәребеҙҙән, еребеҙҙән яҙа барабыҙ. Хәйер, ошоға оҡшаш хәлдәргә тарығандар бер Салауат ағай ғынамы инде? Күп осраҡта ҡыҙҙарыбыҙ сит милләт ирәттарының сөсө теллелегенә, тауҙай вәғәҙәләренә алданып, һемәйә.**

**Салауат ағайҙың һөйләгәнен тыңлағанда ҡаҙаҡтар тарафынан урланған Ғилмизаның һағышлы йыры ҡолаҡ төбөмдә яңғырап киткәндәй, ҡаҙаҡ далаһынан Ирәндек яғына ҡасып ҡайтып барған ете ҡыҙҙың һыны күҙ алдымда салынып ҡалғандай булды. Халҡыбыҙҙың мәшһүр "Ғүмәров" йыры ла ишетелде:**

**Боғаҙаҡҡай күлгә ҡармаҡ һалдым,**
**Ҡармағыма балыҡ ҡапманы.**
**Аҡ сабаҡҡай кеүек килеп ҡаптым,**
**Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ



# ШАКИР ТӨХВӘТУЛЛИН



**Шакир Динислам улы Төхвәтуллин - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәренең береһе. 1894 йылдың 16 декабрендә Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе Мырҙалар улысының (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Салауат районы) Арҡауыл ауылында тыуған. Үҙенең анкетаһында яҙыуынса, Ш. Төхфәтуллин белемде ауыл мәҙрәсәһендә ала. Артабан хәрби хеҙмәткә алынып, ярты йыл әрме хеҙмәтендә йөрөп ҡайта.**

Шакир Төхвәтуллин 1917 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. 1918 йылда Башҡортостан автономияһының Дыуан кантоны башҡарма комитеты рәйесе, кантондың хәрби начальнигы ярҙамсыһы булып эшләй. 1919 йылдың ғинуарында уны Башҡорт хөкүмәтенә эшкә алалар. 16 февралдә Башҡорт корпусы штабы уполномоченныйы сифатында 5-се Башҡорт уҡсы полкына барып, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуы тураһында фарманды иғлан итә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң, 5-се полк һалдаттары Ш. Төхвәтуллинды Темәстә үткән I Бөтә Башҡорт хәрби съезына делегат итеп һайлай. Съезда Башҡортостан автономияһының революцион хөкүмәте - Башревком ойошторола. 1919 йылдың февраленән Шакир Төхвәтуллин Башревкомдың агитация-мәғлүмәт бүлеге мөдире Сәйетгәрәй Мағазовтың урынбаҫары булып эшләй. Март айында Аллабирҙе Йәғәфәров менән бергә Өфөлә көнсығыш фронттың аҙыҡ-түлек буйынса баш комиссары янында эшләй. Башҡортостан халҡын икмәк менән тәьмин итеү эшендә йөрөй.

1919 йылдың августа Башревком Саранск ҡалаһынан ҡайтҡас, Башҡортостандың урындағы власть органдары - кантревкомдар ойоштороло башлай. Ш. Төхвәтуллин үҙенең тыуған яғына эшкә ебәрелә. Уны Дыуан кантонының хәрби комиссары һәм кантревком ағзаһы итеп тәғәйенләйҙәр. 1920 йылдың ғинуарында ул Арғаяш кантонына, Хафиз Ҡушаев урынына хәрби комиссар итеп күсерелә. Май айында Шакир Динислам улы партияның Башҡортостан өлкә комитеты Президиумына кандидат итеп һайлана.

Үҙәк Совет хөкүмәте Башҡортостандың автономиялы хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләгәндән һуң, 1920 йылдың июнендә Шакир Төхвәтуллин Башревком ағзалары менән бергә Төркөстанға сығып китә. 1921 йылда Төркөстанда милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрагандан һуң, ҡабат Башҡортостанға ҡайта. Халыҡ мәғарифы комиссариатында эшләй, артабан Мәскәүҙә Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссариатында (Наркомнац) Башҡортостан вәкиленең урынбаҫары вазифаһында була.

1924 йылда ВЦИК Президиумы янындағы БАССР вәкиленең урынбаҫары булып хеҙмәт итә. 1925 йылда Башҡортостанға эшкә ҡайта. Мәскәүҙә эшләгән осоронда Шакир Динислам улы башҡа автономиялы республикалар вәкилдәре араһында ҙур абруй, ихтирам ҡаҙана.

Шакир Төхвәтуллин Мәскәүҙән ҡайтҡас, БАССР-ҙың Ер эштәре буйынса халыҡ комиссары булып эшләй, һуңынан "Башкоопхлебсоюз" ойошмаһында элемтә бюроһы сәркәтибе вазифаһын биләй. НКВД органдары Ш. Төхвәтуллиндың Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәре икәнен онотмай. 1930 йылдың ғинуарында Шакир Динислам улын ҡулға алып, 5 йылға иркенән мәхрүм итәләр.

1937 йылдың 19 октябрендә Төхвәтуллин тағы ҡулға алына. Ике ай тирәһе төрмәлә тотҡандан һуң, шул уҡ йылдың 7 декабрендә атыла. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте һәм дәүләт эшмәкәре Шакир Динислам улы Төхвәтуллин 1956 йылдың 30 июнендә реабилитациялана.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

*✓ Совет мәғариф системаһының яҡшы яҡтарын донъяның алдынғы илдәрендә өйрәнәләр һәм файҙаланалар, ә Рәсәйҙә был тәжрибәне нисек булһа ла сәбәп табып, күрәләтә хурлау бара.*



**Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының мәғариф секцияһы эшендә ҡоролтай делегаттары менән бер рәттән, мәктәп уҡытыусылары һәм директорҙары, урта һәм юғары профессиональ уҡыу йорттары педагогтары, мәғариф органдары етәкселәре, йәмғәт һәм дәүләт эшмәкәрҙәре, милли мәғариф проблемаларына битараф булмаған башҡа шәхестәр ҙә ҡатнашты. Әлбиттә, ошо һөйләшеү-кәңәшләшеү барышында Башҡортостан мағарифы үҫешендә өлгәшелгән уңыштар тураһында ғына һүҙ барманы, заманса белем биреү системаһын дәүләтебеҙҙең мәгрифәти торошон, халыҡ яҙмышын, ил-йорт киләсәген билдәләүсе фактор булараҡ камиллаштырыу хаҡында ла тос фекерҙәр әйтелде. Һеҙҙең иғтибарға БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитеты рәйесе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхвәт улы БИКБАЕВтың ошо секцияла яһаған фәһемле сығышын тәҡдим итәбеҙ.**

# Мәктәбе ниндәй - дәүләте

## йәки Халыҡ шағирының башҡорт мәғарифы

### Тормош тәжрибәһе булмаһа...

Мәктәбе ниндәй - дәүләте шундай. Был хәҡиҡәт тарихта бик күп тапҡырҙар иҫбатланған. Әгәр ҙә башҡорт балалары ҙур-ҙур ғаиләләрҙә һәм ҡанбабалар мәктәбендә илһөйәрлек, Ватанға тоғролоҡ, ололарға ихтирам, атай-олатайҙар шәжәрәһен өҙмәйенсә лайыҡлы дауам итеү рухында тәрбиәләнмәһә, илебеҙҙе-еребеҙҙе һаҡлап ҡаһарманлыҡтар күрһәткән батырҙарыбыҙҙы йәштәр үҙҙәренә үрнәк итеп алмаһа, яңы быуындар ҡыйыулыҡ, берҙәмлек сифаттарын үҫтереп сыныҡтырмаһа, халҡыбыҙ әллә күпме ҡыйралыштарҙан һуң тыуған ер өсөн яуҙарға яңынан күтәрелә алыр инеме? Азатлыҡ өсөн көрәшен туҡтатмаҫлыҡ яңы көс-ғәйрәт таба алыр инеме? Ҡаты һынауҙарҙа туплаған тормош тәжрибәһе, зирәк аҡылы, ғаилә һәм ҡанбабалар мәктәбе, халыҡ педагогикаһы башҡорт иленең иң ышаныслы таянысы булған бит.

Әгәр ҙә уҙған быуаттың утыҙынсы йылдарында уҡыусыларҙа патриотлыҡ сифаттарын үҫтереү иң төп маҡсаттарҙың береһе итеп ҡуйылмаһа, барлыҡ саралар менән көнө-төнө йәштәрҙең күңеле ватансылыҡ тойғоһо менән һуғарылмаһа, Бөйөк Ватан һуғышында СССР бөтә Европаны теҙләндергән дәһшәтле фашистик Германияны еңеп сыға алыр инеме? Юҡҡамы ни Бисмарк үҙенең бер еңеүенән һуң: "Пруссия мәктәбе Австрия мәктәбен енде", - тигән һүҙҙәрҙе әйткән. Эйе, һәр дәүерҙә лә онотолмаҫҡа тейешле дөрөҫлөк: мәктәбе ниндәй - дәүләте шундай.

### Инновациялар - яңыртыуымы, әллә баш ҡаңғыртыуымы?

Ниндәй хәлдә һуң хәҙерге Рәсәй Федерацияһында һәм уның айырылғыһыҙ өлөшө булған Башҡортостан Республикаһында уҡыу-уҡытыу системаһы? Яңы быуынды уҡытыуҙа һәм тәрбиәләүҙә ниндәй уңыштар яуланған, ниндәй юғалтыуҙар борсой, ниндәй хәл ителмәгән мәсьәләләр йыйылған? Был хаҡта бер нисә көн буйына әллә күпме секцияларға бүленеп, ғилми конференцияла ентекле һүҙ алып барһаң да, осона сығырлыҡ түгел.

Боронғо дәүерҙәрҙә балаларға белем биреү һәм тәрбиәләү тәртибе һәр милләттең тормош аҡылы, халыҡ педагогикаһы, быуаттар буйына тупланған һәм даими үҫтерелә килгән тормош тәжрибәһенән тыуған яҙылмаған ҡанундар буйынса билдәләнгән. Яңы замандарҙа мәктәптәрҙә һәм башҡа уҡыу йорттарында эшләү өсөн төрлө ҡулланмалар, күрһәтмәләр сығарылған, программалар төҙөлгән, илдең һәр гражданына хоҡуҡ биреүсе һәм шул хоҡуҡтарҙың үтәлешен ҡәтғи талап итеүсе закондар яҙылған.

"Мәғариф тураһында" тип аталған закон Рәсәй Федерацияһында ла, Башҡортостан Республикаһында ла ҡабул ителгән. Бер генә ҡанун да бер тапҡыр яҙылған рәүешендә мәңгелек булып ҡала алмай, үҙгәрә, тулылана бара. Ләкин илдәге закондар араһында мәғариф тураһындағы ҡанун һымаҡ туҡтауһыҙ үҙгәртелгәндәрен табыуы ҡыйын. Эксперименттар, төрлө новациялар, фәнни эҙләнеүҙәрҙә тыуған тәҡдимдәр, һис шикһеҙ, кәрәк. Ләкин уҡыу-уҡытыу системаһында һуңғы йылдарҙағы эксперименттарҙың бик күптәре урынһыҙ ғына түгел, хатта зарарлы. Инновация һүҙен кәрәккә лә, кәрәкмәгәнгә лә ҡулланып, закондарға, программаларға, белем биреү стандартына индерелгән төҙәтмәләрҙең байтағы балаларҙың башын бутауға, рухын фәҡирләндереүгә килтерә. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, юғары дәүләт чиновниктарының һәм төрлө уйҙырмалар менән үҙҙәрен ғалим, белгес итеп танытырға тырышыусыларҙың эшмәкәрлеге дәүләттең нигеҙен ҡаҡшатыуға йүнәлтелгән. Быны һөҙөмтәләрен әле үк тойорға мөмкин, киләсәктә иһә был емерткес күренештәрҙең федерация кимәлендәге милли фажиғә тыуҙырыу ҡурҡынысы бар.



> *Туған тел, әҙәбиәт, тыуған яҡ тарихы буйынса дәрестәрҙе ҡыҫҡартыуҙа йәки бөтөнләй бөтөрөүҙә яңы стандарттар әҙерләүселәр уҡытыу сәғәттәре етмәүенә һылтанмаҡсылар. Әммә мәктәптәрҙә дин дәрестәрен уҡытыуҙы индерергә ҡайҙандыр мөмкинлектәр табалар бит. Халҡыбыҙға дини ҡиммәттәрҙең яңынан әйләнеп ҡайтыуына сикһеҙ ҡыуанһам да, мәктәптәрҙә дин дәрестәрен уҡытыу, балаларҙы төрлө конфессиялар буйынса бүлгеләү күп буталсыҡтар тыуҙырыр, тип ҡурҡам. Уны уҡытырлыҡ кадрҙар, дәреслектәр ҡайҙа? Тарих дәреслектәрендә донъя диндәренең нигеҙҙәрен өйрәнеү өсөн урын бүлеү, бәлки, дөрөҫөрәк булыр.*

### Яҡшыны - һаҡлау, зарарлынан һаҡланыу фарыз

Беҙҙең был секцияға мәғариф эшен яҡындан белгән, шуны яҡшыртыу өсөн янып йөрөгән милләттәштәребеҙ йыйылған. Улар мәсьәләнең асылын бер-ике һүҙ менән әйткәндә лә тотоп ала торған кешеләр. Мәҫәлән, БДИ тирәһендәге ығызығы хәҙер балаларҙың үҙҙәрен үҙҙәре һәләк итеүенә килтерә башланы. Был система буйынса имтихандарға әҙерләнеү һәм уларҙы биреү баланың ижади фекерләү һәләтен бөтөрә. БДИ-ны индереү иң ғәҙеле буласаҡ, тигән вәғәҙәләр юҡҡа сыҡты, шул арҡала яңы енәйәттәр ҡылынды.

Юғары уҡыу йорттарында йәш белгестәрҙе ике кимәлдә - бакалавриат һәм магистратура программаһы буйынса әҙерләү шулай уҡ үҙен аҡламаясаҡ. Совет илендәге мәғариф системаһы юғары ҡаҙаныштары менән бөтә донъяла ихтирам яулағайны. Ул замандың мәктәптәре лә, юғары уҡыу йорттары ла белемле йәштәрҙе әҙерләү, намыҫлы шәхестәрҙе тәрбиәләү хаҡында дәүләт кимәлендә хәстәрлек күрә торғайны.

Мин бер ваҡытта ла коммунист булманым, үҙенең коммунистарын яҡлай, тип уйлай күрмәгеҙ. Ләкин мин Коммунистар партияһы етәкселек иткән илдә тыуҙым, етем үҫтем, әллә ҡайҙағы Ырымбур далаларындағы ауылда бөтә дәрестәрҙе лә үҙ телемдә рәхәтләнеп уҡыным, илһамланып эшләнем. Шуға ул дәүләткә дәғүәләремә ҡарағанда рәхмәттәрем күберәк.

Яҡшыны яҡшы тип әйтергә, уны һаҡларға һәм яҡларға кәрәк. Совет мәғариф системаһының яҡшы яҡтарын донъяның алдынғы илдәрендә өйрәнәләр һәм файҙаланалар, ә Рәсәйҙә был тәжрибәне нисек булһа ла сәбәп табып, күрәләтә хурлау бара. Ватаныбыҙ күпме хеҙмәттәр һалып тыуҙырған байлыҡтарҙы юҡҡа сығарыу бара.

### Өҫтөнлөклө милли проект һөҙөмтәһеҙ прожектҡа әүерелә...

Тормоштоң һәр тармағындағы үҙгәртеүҙәр хоҡуҡиәт нигеҙендә, законлы рәүештә, йәғни Конституция талаптарын ҡәтғи үтәп индерелергә тейеш. Ләкин һуңғы йылдарҙа мәғариф системаһындағы үҙгәрештәр, белем биреүҙең федераль стандартындағы яңыртыуҙар йыш ҡына бик принципиаль моменттарҙа конституцион нормаларға ҡаршы барып эшләнә.

Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы, шулай уҡ Рәсәй Федерацияһының Төп законы буйынса һәр граждандың туған тел менән файҙаланыу мөмкинлеге, аралашыуҙа, тәрбиәләүҙә, уҡытыуҙа һәм ижадта телде ирекле һайлау хоҡуғы гарантиялана. Ләкин һуңғы йылдарҙа Конституция тарафынан гарантияланған был хоҡуҡтарҙы бик ныҡ сикләүҙәр йышайҙы.

2007 йылдың 1 декабрендә Дәүләт Думаһы ҡабул иткән 309-сы Закон буйынса 2010 йылдан белем биреүҙең дәүләт стандартынан милли-төбәк компоненты алып ташланыла. Туған телде, әҙәбиәтте өйрәнеү ҡыҫыла, тыуған яҡты, уның географияһын, тарихын өйрәнеү өсөн махсус сәғәттәр программаға индерелмәй.

Әле яңы ғына Рәсәйҙең өҫтөнлөклө милли проекттары күккә күтәрелеп данлана, уларҙы үтәү тарихи ваҡиға буласаҡ, тигән вәғәҙәләр көнөнә нисә тапҡыр ҡабатлана торғайны. Хәҙер ул пландар онотолдо, буш хыялдар юҡҡа сыҡты тиерлек. Дәүләт кимәлендәге проект прожектҡа әйләнә икән, был инде бер ниндәй ҙә ҡалыпҡа һыймай.

Мәғариф буйынса өҫтөнлөклө милли проект хаҡында бөгөн бигүк өндәшеп бармаһалар ҙа, һәр кем өсөн белем алыу мөмкинлеге булыуы һәм уның сифаты тураһындағы талаптар йыш ҡабатлана. Ләкин беҙ шундай һорау ҡуйырға хаҡлыбыҙ һәм тейешбеҙ: милли-төбәк компоненты инҡар ителгәндә, мәктәптәрҙе финанслау йән башы нормативына күскәндә, автономиялы учреждениелар системаһын ғәмәлгә ашырғанда мәктәптәр, китапханалар, клубтар, дауаханалар дәүләт ярҙамы алмайынса үҙ көнөн үҙе күрергә тейеш булғанда ниндәй мөмкинлек һәм сифат тураһында һүҙ алып барырға була?

Йән башына, йәғни уҡыусылар һанына ҡарап аҡса бүлеү беҙҙең республикала иң элек күпселеге ҙур булмаған башҡорт ауылдарында мәктәптәрҙең күпләп үҙгәртелеүенә йәки бөтөнләй ябылыуына килтерә. Республика етәкселәре лә, урындағы халыҡ та күпме тырышып ҡарай, ләкин хәлде яҡшыртыр юлдарҙы табыуы бик ҡыйын. Сөнки закон, етерлек уйланмайынса эшләнһә лә, ғәҙел ҡабул ителмәһә лә, бар ерҙә үтәлергә тейешле документҡа әйләнә. Уны үтәмәй сараң юҡ. Бындай ҡанундарҙың төрлө төбәктәрҙәге төрлө үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алмауы бик ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Мәктәптәрҙең ябылыуы, шул арҡала ауылдарҙың бөтөүгә дусар ителеүе башҡорт милләтенең киләсәк яҙмышы өсөн ҡурҡыныс күренешкә әйләнә.

### Шәжәрәләр тарих һөйләй

Башҡортостан Республикаһының мәғарифты үҫтереүҙәге уңыштары Федерация кимәлендә, хатта унан ситтә лә хөрмәт яуланы. Элек ғүмерҙә башҡортса һүҙ ишетелмәгән Өфө мәктәптәрендә хәҙер сәхнәнән башҡортса шиғыр уҡыйҙар, ҡурай моңо яңғырай, уҡыусылар башҡорт телен өйрәнә. Әле яңы ғына Яҙыусылар союзы Дүртөйлө, Илеш, Туймазы яҡтарында башҡорт әҙәбиәте көндәрен үткәрҙе. Унда ҡатнашҡан шағирҙар, әҙиптәр, райондарҙағы һәйбәт үҙгәрештәрҙе күреп, ҡыуанып ҡайтты. Уҡыусыларҙың туған телдәге сығыштары, китапханаларҙағы

милли матбуғат, матур күргәҙмәләр, һәйбәт эшләп алып киткән башҡорт гимназиялары - һанай башлаһаң, шатланырлыҡ уңыштар байтаҡ. Ләкин йәшерен-батырын түгел: көнбайыш райондарҙа асылған башҡорт гимназияларының ҡайһы берҙәрендә башҡорт телен белгес булмаған осраҡлы кешеләр уҡыта. Бындай хәлдәр Өфөнөң үҙендә лә тулып ята. Тимәк, кадрҙар мәсьәләһе тағы ла нығыраҡ иғтибарҙы талап итә.

Илеш районында беҙҙе бигерәк тә күбеһе уҡыусылар төҙөгән шәжәрәләр һоҡландырҙы. Улар кластарҙы, коридорҙарҙы биҙәп тора, күбеһе ун-ун биш быуын нәҫел тамырҙарын билдәләгән. Ырыу шәжәрәһен тергеҙеүҙә Илеш ерендә башҡаларға үрнәк булырлыҡ эҙәрмән шәхестәр бар. Мәҫәлән, Фидан Мәрүәров төҙөгән шәжәрәнең быуындары егерменән ашып киткән, уҙаман уны ҡырҡҡа еткермәксе.

Башҡорт шәжәрәләре буйынса башланған саралар республикалағы башҡа милләттәргә лә һәйбәт йоғонто яһаны. Хәҙер рустар ҙа, татарҙар ҙа, башҡа халыҡтар ҙа ырыу ағасының тамырҙарын һәм бөгөнгөгә килеп тоташҡан тармаҡтарын барлай.

Халҡыбыҙға дини ҡиммәттәрҙең яңынан әйләнеп ҡайтыуына сикһеҙ ҡыуанһам да, мәктәптәрҙә дин дәрестәрен уҡытыу, балаларҙы төрлө конфессиялар буйынса бүлгеләү күп буталсыҡтар тыуҙырыр, тип ҡурҡам. Уны уҡытырлыҡ кадрҙар, дәреслектәр ҡайҙа? Тарих дәреслектәрендә донъя диндәренең нигеҙҙәрен өйрәнеү өсөн урын бүлеү, бәлки, дөрөҫөрәк булыр.

Мәктәп менән мәсет халыҡты тәрбиәләү юлында икеһе лә изге эштәр башҡара. Ләкин ауылдарҙа мәсет асылып та, мәктәп ябылһа, унда йәшәүселәрҙең иртәгәһе көнө ышаныслы тип әйтеп буламы? Юҡ, әйтеп булмай. Ғибәҙәтхана белем усағының бурыстарын бер ваҡытта ла үтәй алмай. Әфтиәк тә кәрәк, әммә сабыйҙың оло донъяға юлы әлифбанан башлана.

## Дәүләт мәктәптән башлана

Хәҙерге мәғариф системаһында уҡытыуҙың өҙөлмәйенсә барыуы - өҙлөкһөҙ белем биреү кәрәклеге хаҡында урынлы талап бар. Был бигерәк тә туған телде өйрәнеүҙә бик мөһим. Ғаилә - балалар баҡсаһы - мәктәп тигән сылбыр ышаныслы үрелгән булырға тейеш. Быны тормошҡа ашырыр өсөн мәғариф етәкселәре генә түгел, ата-әсәләр ҙә яуаплы. Ғаиләлә башҡортса һөйләшеү, балалар баҡсаһында башҡорт телен өйрәтеүҙе талап итеү, мәктәптә баланды башҡорт класына биреү - бына ошо мөҡәддәс бурыстарҙы үтәнем, тип беҙҙең ата-әсәләрҙең ундан нисәүһе, йөҙҙән нисәүһе ғорурланып әйтә алыр?

Һәр башҡорт йортона башҡорт китабын, гәзит-журналдарын еткереү, сабыйҙарҙа шуларға бәләкәстән һөйөү тәрбиәләү - быларҙы бит етәкселәр түгел, ата-әсәләр үҙҙәре хәл итергә тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың күптәре башҡорт китабын, милли матбуғатыбыҙҙы тотоп та ҡарамай.

Мәғариф өлкәһендәге хәүефле мәсьәләләр тураһында һүҙ алып барғанда беҙ иң элек Башҡортостандағы мәктәптәрҙе күҙ уңында тотабыҙ. Ә бит республиканан ситтә йәшәүсе башҡорттарҙың тормошонда хәлдәр тағы ла хәүефлерәк. Башҡорттар күпләп йәшәгән Силәбе, Ырымбур, Ҡурған, Һамар, Һарытау өлкәләрендә бай традициялары булған милли мәктәптәр йәки түбән кимәлгә төшөрөлә, йәки бөтөнләй ябыла. Пермь крайында 40 меңдән ашыу башҡорт йәшәй, ләкин башҡорт телен өйрәнгән бер генә мәктәп тә юҡ. Ямал-Ненец автономлы округында 8 мең милләттәшебеҙ йәшәй, ләкин башҡорт телен өйрәнеү ойошторолмаған. Ханты-Манси округында 36 меңгә яҡын башҡорт кешеһе булһа ла, туған телде бер йәкшәмбе мәктәбендә ни бары 30 бала өйрәнә.

Егерменсе быуатты башҡорт халҡы Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" тигән ораны менән ҡаршы алды. Ошо йөҙ йыллыҡта халҡыбыҙ әлифбанан үҙенең энциклопедияһына тиклем юл үтте. Аҡмулланың саҡырыуы бөгөн дә бик кәрәк. Яңы мең йыллыҡты мең һорауҙар менән ҡаршы алдыҡ. Ул һорауҙарға яуаптарҙы бергәләшеп эҙләү фарыз.

# ШУНДАЙ,

## тураһында әйткәне

### Барыһы ла һәйбәт тә ул…

Әммә беҙҙең Башҡортостан оло донъянан айырылған бәрәкәтле бер оазис булып ҡына йәшәй алмай. Донъяны билəгән тарҡалыштың ағыулы өйөрмәләре беҙҙең йәш быуынды ла урап үтмәй. Үҙәк телевидениеның барлыҡ каналдары ла тиерлек үлтереште, аҙғынлыҡты көнө-төнө пропагандалай. Интернет кәрәкле мәғлүмәт сығанағы ғына түгел, оятһыҙлыҡ ояһы ла ул. Быларҙан балаларҙы ҡурсалауы бик ҡыйын. Яңы быуын рухи тамырҙарыбыҙҙан айырыла, зауыҡлы китаптарҙан ситләшә. Хәҙерге уҡытыусыларға һәм тәрбиәселәргә бына ошондай үтә ҡатмарлы шарттарҙа эшләргә, һәр баланың күңеле өсөн көрәшергә тура килә.

Бындай солғаныштa рухиәт тураһында һүҙ алып барыуы ҡыйын. Шулай ҙа һәйбәт теләктәр, яҡшы башланғыстар барыбер бушҡа китмәй. Әле шәжәрәләрҙең яңырыуына иғтибар иттем. Ләкин тыуған яҡтың тарихын өйрәнеүгә айырым ваҡыт бүленмәй икән, балаларҙың белеме тулы булмаясаҡ.

Башҡортостан яңы мәктәптәр асыу буйынса бөтә Федерацияла бына нисә йылдар беренсе урында килә. Эштәр былай барһа, мәктәптәрҙе ябыу буйынса ла беренселәр рәтенә килеп сыҡмаҫбыҙмы?

Дәреслектәр тигәндән, был өлкәлә лә хәл ителеүҙе көткән мәсьәләләр тулып ята. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте ҙур үҫеш юлы үтте, әммә утыҙынсы-ҡырҡынсы йылдарҙа яҙылып та, хәҙер художество кимәле түбән булған әҫәрҙәр һаман да мәктәп программалары буйынса өйрәнелә, ә юғары сифатлы булғандары иғтибарҙан ситтә ҡала. Әҙәбиәт тураһында ялҡытҡыс тел менән һөйләү уҡыусыларҙы мауыҡтырыу урынына биҙҙерергә генә мөмкин.

Райондарҙа йөрөгәндә ауыл һәм мәктәп китапханаларында кәштәләрҙә күберәген иҫке китаптар торғанын күрәһең. Яңы китаптар күп урындарға барып етмәй. Милли матбуғатҡа яҙылыу ҙа һүлпән бара.

### Дин дәрестәре кәрәкме?

Туған тел, әҙәбиәт, тыуған яҡ тарихы буйынса дәрестәрҙе ҡыҫҡартыуҙа йәки бөтөнләй бөтөрөүҙә яңы стандарттар әҙерләүселәр уҡытыу сәғәттәре етмәүенә һылтанмаҡсылар. Әммә мәктәптәрҙә дин дәрестәрен уҡытыуҙы индерергә ҡайҙандыр мөмкинлектәр табалар бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күмәкләгән - яу ҡайтарған. Мәктәптәребеҙҙең яҙмышын уҡытыусылар ғына хәстәрләргә тейеш түгел. Шулай уҡ башҡорт китабы тураһында яҙыусыларыбыҙ ғына уйлаһа, милли матбуғатыбыҙҙы халыҡҡа еткереү журналистарҙың ғына иңенә йөкмәтелһә, эштәребеҙ алға бармаясаҡ. Бигерәк тә мәктәпте ҡурсалау - дәүләттең дә, халыҡтың да, һәр шәхестең дә мөҡәддәс эше. Ғаиләнең юлы мотлаҡ белем үҙәгенә илтә. Уны урап үтеү мөмкин түгел, һәр ауыл, һәр ҡала, тотош ил мәктәптән башлана. Ҡайҙа ғына барһаң да, тормош кимәлен, халҡының рухын беләйем, тиһәң, иң элек мәктәптәрен ҡара. Мәктәбе нindәй - дәүләте шундай.**

*АТАЙЫМ ҺАБАҠТАРЫ*

# БӘХЕТЛЕМЕН...

## атай-әсәйле булып йәшәгәнгә

● Өйҙә атайым менән икәү генәбеҙ. Өләсәйем килеп инде лә, атайымды нығ итеп тиргәп ташланы. Иҫем китеп, атайыма ҡарайым. Ул тыныс. Башын эйеп, өнһөҙ генә тыңлап ултыра. Эш боҙған бала хәлендә ултырыуын тәүгә күреүем. Өләсәйемдең дәғүәләре ғәҙел булмаһа ла, атайым ҡаршы һүҙ әйтмәне. Өләсәйем китеп, хәтһеҙ генә һүҙһеҙ ултырғас: "Ниңә бер ни ҙә тимәнең?" - тип һорап ҡуйҙым. Яуабы бик ҡыҫҡа булды: "Ул бит әсәй".

● Өйөбөҙгә йыш ҡына бер ағай килә. Күпме килһә лә һүҙе бер тирәлә урала. Ул атайымды йәшәй белмәүҙә матҡура. Сос кешеләр нисек йәшәүен, анһат мал табыуын, файҙа күреүен, белекле донъя көтөүен аңлатырға тырыша. Атайым да, әсәйем дә бер ни ҙә әйтмәй. Шым ғына үҙ эштәре менән булалар. Монолог һәр саҡ бер үк һығымта менән тамамлана. "Э-э-э, ҡулыңда мөмкинлегең булһын да, файҙаланмасәле шуны", - ти.

● Атайымдың яратҡан йырҙары бар ине. Береһен - һағышлыһын һирәк йырланы. Атаһы, Хаммат Ҡәйүм улы, Себер ебәрелгәндә йырлап киткән булған был "Илсе Ғайса" йырын. Тик кулак заты, халыҡ дошманы улы ярлығын йөкмәп, етемселек типкеһендә үткән тормошона бер ҡасан да зарланманы атайым.

● Бай булмаһаҡ та, етеш йәшәнек. Шулай ҙа сәс толомона тәү таҫма бәйләү бәхете тик алтынсыла уҡығанда ғына тәтене. Әммә бәхетемә йылмайған ул түгел ине. Мәктәптә шундай матур Яңы йыл байрамы бара. Бай итеп биҙәлгән шыршы әйләнеп тора. Атайым кластарҙа уйындар әҙерләгән. Берәүһендә күҙ бәйләү уйынын уйнайҙар. Оҙон бауҙа ҡиммәтле, күҙ ҡамаштырғыс, тормошта буй етмәҫ бүләктәр теҙелгән. Кемгәлер бәхет йылмая, кемгәлер - юҡ. Улары яңынан сират баҫа. Ә мин шаҡ ҡатып бауға текләгәнмен. Эленгән һәр әйбергә күҙ ҡыҙа. Шулай ҙа таҫма еңде. Ныҡ күҙәттем башҡаларҙы. Яҙлыҡмаҫ өсөн. Бер ынтылышта таҫмалы булыу өсөн. Сират баҫтым. Таҫмалы булдым. Иртәгәнән ғүмеремдәге тәүге каникулым башлана. Ә минең дәрескә барғым, таҫмамды таҡҡым килә.

● Апайымды тыуған көнгә саҡырҙылар. Бүләк кәрәк. Тәүгә ҡунаҡҡа саҡырылыуы апайымдың. Бик тә барғыһы килә. Минән таҫманы һорап инәлә. Апайымды йәлләйем. Үҙем дә йәл. Ныҡ торам, бирмәйем. Саҡырыу мәле етеп, сараһыҙ ултырған апайыма бирмәҫкә хәлем етмәне. Шундай бай шыршы байрамы ойоштորған атайымдың ҡыҙҙарын былай ғына таҫмалы итеү мөмкинлеге лә булғандыр. Тик был башҡа инеп тә сығаһы хәл түгел ине. Яҙмышыма рәхмәтлемен. Ҡыуанам нәфсемде еңә алғаныма. Атайымдың таҫма түбәнлегенә төшмәүенә. Бүләк алған апайҙың изге күңелле булғанына. Кешеләргә күңел йылыһын ихлас өләшкәненә.

● Мәктәп уҡытыусылары ҡайҙа киткән булғандарҙыр. Кластан-класҡа йүгерә-атлай, ҡыуана-көлә атайым дәрес үткәрә. Бөтә мәктәп тик математика ғына уҡый, мәсьәлә сисә. Был атайымдың йондоҙло сәғәте ине буғай. Дәрт-дарманы ташып, ташып дәрес бирҙе ул. Арҡаһында ҡанаттары ла бар һымаҡ ине.

● Шулай бер көн атайым район түрәләре килеп үткәргән йыйылыштан көйөп ҡайтты. Ауыл халҡына кәрәкле әйберҙәр алдырыу өсөн тәҡдимдәр ҡаралған икән. Депутат юлламаһы аша. Эсен бошорғаны, көйҙөргәне шул: айырым кешеләрҙең шәхсән үҙҙәре өсөн һораныуы. "Бөтә ауыл мәнфәғәтендәге әйбер һорарға кәрәк тә инде", - тип әсенде ул.

● Етенсе класҡа ла еттек. Политучебаға йөрөйбөҙ. Атайым уҡыта. Бығаса математик итеп кенә белгән атайым бөтөнләй икенсе юҫыҡтан уйылды йөрәгемдә. Павел Корчагин һүҙҙәре менән: "Жизнь дается только один раз. Надо прожить ее так, чтоб не было мучительно больно за бесцельно прожитые годы". Н.Островскийҙың китабын һыу эскән кеүек уҡып сыҡҡан инем мыңарса. Күрмәй үткәнмен ул һүҙҙәрҙе. Нәҡ тә өләсәйем әйткәнсә: "Күңел күҙе күрмәһә, маңлайҙағы күҙ - ботаҡ тишеге".

● Мәсьәләләрҙе һөйләп эшләйбеҙ. Атайым шулай беҙҙе логик фекерләргә өйрәтә. Ара-тирә көйөп китә. "Үҙ телегеҙҙә, башҡортса һөйләшә белмәйһегеҙ", - ти. Ә үҙенең теле шундай бай. Бошорлоҡ та шул. Балаларыбыҙҙың теле беҙҙекенән дә ярлыраҡ. Ҡайҙа түгелеп, сәселеп ҡала икән ул матур-матур һүҙҙәребеҙ? Йырлы-моңло һөйләшле ағай-апайҙар баҡыйлыҡҡа күсеп бөттө.

● Атайым килде ҡунаҡҡа. Пенсияға сыҡҡан. Донъя ташлап, ҡыҙҙарының хәлен белешеп йөрөй Иҙел буйлап. Күпмелер үткәс, аръяҡ күршем һорай: "Ниндәй егет баҡсағыҙҙа йөрөнө ул бер көн? - ти. - Матур зәңгәр спортивкала ине", - тип аныҡлыҡ индереп ҡуя аптырауыма. Беҙ ирем менән эштә саҡта кәртә артындағы тырым-тыраҡай ятҡан тиреҫте өйгән икән атайым.

● Күҙ асып йомғансы тигәндәй шинде. Сирҙең ни икәнен дә белмәгән атайым пенсияға сығыуҙы кисерә алманы, буғай. Мәрхүм булырынан бер ай элек таяҡҡа таянып, саҡ-саҡ атлап килә ине. Атылған, ҡанаты ҡайырылған ҡоштай.

**● Донъяларҙан китеүенә 15 йыл да булып киткән икән. Ваҡыт арауығы араларҙы күпме йыраҡлаштырһа ла күҙ алдымда тик тере һыны, ҡанатлы сағы. Йылмайып йәшәне, яратып йәшәне. Йылмайып, яратып эшләне. Күҙҙәре мәңгегә йомолғанда ла йөҙөндә йылмайыу ине.**

**Хәтһеҙ генә донъя гиҙеп, байтаҡ кешеләрҙе тап иттем, юлда ла, районда ла, ҡырҙа ла. Кемелер Хаммат олатайым өсөн, кемелер атайым өсөн яҡын күрҙеләр. Бәхетлемен атай-әсәйле, туғандарлы тормошом менән. Бәхетлемен ауылым, тыуған ерем, уҡыған мәктәптәрем, уҡытыусыларым, класташтарым менән. Бәхетлемен эшләгән урыным, коллегаларым менән. Уҡытыусылар йылы айҡанлы район уҡытыусылары өсөн атайым Сәғитов Зәки Хаммат улы исемендәге премия булдырыуҙарына мәғариф һәм район етәкселегенә рәхмәт. Баш особоҙҙа Тыныслыҡ, Именлек, Сәләмәтлек әләме елберләп, тормошобоҙҙа ныҡлыҡ, сабырлыҡ, фиҙаҡәрлек идара итһен.**

**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА,**
**уҡытыусы.**
**Бөрйән районы**
**Байназар ауылы.**

**✓ Сәйет юҡҡа ғына Резедаға тишерҙәй итеп ҡарамаған икән, ауылдан яңы ғына килгән, нимә тиһәләр ҙә ауыҙ асып ышанған, балалыҡтан саҡ сыға башлаған алсаҡ ҡыҙға шунда уҡ ҡармаҡ һалып ултырған булып сыҡты.**



Бер көндө, йәйге имтихандар мәлендә, кисләтеп кенә Ирғәле килеп инде. Йөҙө күмер кеүек ҡара көйгәйне. Иң яҡын кешең был донъянан киткәндә генә шулай ҡайғырып булалыр. Инде лә, бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә, ҡыҙҙың карауатына ултырҙы. Тәүҙә Резеда үҙе лә, бүлмәләш ҡыҙҙары ла уны иҫерек тип уйланы. Әммә Ирғәле тамсы ла эсмәгәйне.

- Ни булды? - Ҡыҙҙың уға ҡарап ҡото осто, - берәйһе үлгәнме әллә?

- Юҡ та... - Егет, сыҡмаҫһығыҙмы, тигәнде белдереп, алмаш-тилмәш ҡыҙҙарға ҡараны. Бүтән ваҡытта әпәләп-һәпәләп, Резеданы үҙҙәре үк кейендерешеп, икеһен сығарып ебәрерҙәр ине, әле иһә, Ирғәлене иҙелгән йөҙөнә ҡарап, бер-бер артлы шым ғына сығып киттеләр.

- Йә, - тип түҙемһеҙләнде Резеда икеһе генә ҡалғас. - Һөйләй һал, ни булды?

Ирғәле бер нәмә лә өндәшмәне, кәүҙәһен ауырлыҡ менән күтәреп, өҫтәл артына күсеп ултырҙы. Ҡуйынынан бер ярты сығарҙы. Уның эскәнен күреп өйрәнмәгән Резеда аптырап китте, шулай ҙа стакан алып ҡуйҙы, икмәк телеп һалды, ҡабаҡ икраһы асып ултыртты. Башҡа ризыҡтары ҡалмағайны, ә стипендияға тиклем арыу уҡ ваҡыт бар ине әле.

- Үҙеңә лә килтер! - тип ҡоро ғына бойорҙо Ирғәле.

- Мин эсмәйем бит...

- Барыбер килтер. Нимә, бер үҙем эсеп ултырайыммы ни?

Резеда өндәшмәй генә тағы бер стакан алды. Ҡаршыһына килеп ултырҙы, һораулы ҡарашын һөйгәненә төбәне, ыҙалатма, йәнәһе.

Ирғәле, алдында ялтырап ултырған шешәгә текәлеп, бер талай үҙ уйҙарынан арына алмай аҙапланды. Унан ауыр көрһөнөп, шешәгә үрелде. Үҙенекен Резедаға ҡарамай ғына бөткәнсе эсеп ҡуйҙы. Артынса икмәк киҫәге алып еҫкәне лә, һауытына кире һалды.

- Эс! - тип бойорҙо Резедаға.

- Мин бит эсмәйем, тулы килеш... - тип һөйләй башлағайны, Ирғәле баяғынан да ҡатыраҡ тауыш менән:

- Эс тейем мин һиңә! - тип бүлде уны.

Резеда аптырап, иҫе китеп ҡараны Ирғәлегә. Уның бындай сағын тәүләп күреүе ине. Ҡурҡышынанмы, күҙҙәрен йомдо ла, ирене аша һығып бер-ике йотом уртланы ла уҡшып-уҡшып сәсәргә тотондо. Ирғәле арҡаһына һуҡҡас ҡына тынна алды.

- Мине үлтерергә уйланың, ахырыһы, - тип үпкәләне Ирғәлегә.

Уныһы хәс тә ишетмәне, стакандарға тағы араҡы һалды. Быныһында ҡыҙҙы ҡыҫтап торманы, төп күтәрә йәнә эсеп ҡуйҙы.

- Миңә аҡса кәрәк, - тине ул шунан һуң ғына.

- Шуның өсөн ошолай ҡыланырға кәрәк инеме ни? - Резедаға әҙерәк йән ингәндәй булды.

- Миңә күп кәрәк, аңлайһыңмы? Бик күп! Отолдом мин. Түләмәһәм - үлтерәсәктәр. Үлтермәһендәр, тиһәм, ғүмер буйы уларға эшләргә тейешмен.

- Һин нимә һөйләйһең ул? Кем үлтерә?

- Кемдәргә эшләйем - шулар. Бик ҡурҡыныс әҙәмдәр улар, Резедаҡайым, ниҙәр генә ҡылайым икән, ә? - Ирғәле ҡурҡынған күҙҙәре менән ялбарып уға ҡараны. Әйтерһең дә, был мәсьәләне Резеда ғына хәл итә ала. Ҡыҙ уның ҡайҙа, кемдәр менән эшләүен белмәй. Һораһа гел: охранала, охранник мин, тиер ине. Һаҡлауын һаҡлағандыр, формаһы ла бар бит. Тик нимәне? Кемде? Ҡыҙыҡһынһа, бәлки, ҡайҙа эшләүен асыҡлар ҙа ине, әммә кәрәк тапманы. Иң мөһиме, һәр ваҡыт кеҫәһендә аҡсаһы бар, Резеданың һораған нәмәһен алып бирә. Киләсәктә бер мохтажлыҡ күрмәҫһең, тип ышандыра. Резеда ошондай бөтмөр кешегә юлығыуына ҡыуана ғына: киләсәге ышанысл ы. Юҡһа, бүлмәләш ҡыҙҙарының егеттәре ауыҙҙарын асһа - үпкәләре күренергә тора. Ни сәскә алып бирергә хәлдәренән килмәй, ни теләгән ваҡытта киноларға, кафеларға саҡыра алмайҙар. Шуға күрә әхирәттәре Резеданан үлеп көнләшә.

- Уларға бер барып эләкһәң, иҫән-һау ҡотолоп булмай, тип әйтә торғайнылар шул егеттәр, әллә ни эшләп тыңламаным бит! - тип араҡыһы башына киткән Ирғәле әллә үҙ алдына, әллә Резедаға һөйләне. Ҡыҙ уның һүҙҙәренән Ирғәленең ниндәйҙер мафия менән бәйләнгәнлегенә төшөндө. Үҙенә лә ҡурҡыныс булып китте. - Мин бит китәм, тигәйнем, - тип хәбәрен дауам итте егет. - Уларҙың үҙҙәренә лә әйттем был турала. Ә улар... мине ебәрмәҫ өсөн ана нисек хайуандарса ҡыланды... Ҡыҫымға алдылар. Кемеһендер үлтергәндәр, шуны хәҙер миңә ябып маташалар. Ә мин унда булманым! Бер ҡыҫылышым да юҡ минең. Резеда, тамсы ла ғәйебем юҡ, ышанаһыңмы?

- Ышанам! - тип икеләнергә урын ҡалдырмайынса ҡырҡа әйтте ҡыҙ. Сөнки уның бандиттарҙың эше тураһында күп тапҡырҙар ишеткәне бар ине. Охранала йөрөгәс, Ирғәле, моғайын, күпте беләлер, шулай булғас, нисек ебәрһендәр? Яҡшы эштәр менән шөғөлләнмәйҙәр бит: ҡайҙа енәйәт, ҡайҙа үлтереш - улар шунда. Шаһиттар, билдәле, кәрәкмәй. Ә Резеда һөйгәненә ышана - себенде лә рәнйетә алмағанын белә. Йомшаҡ күңелле, бар нәмәне йөрәгенә яҡын ала. Уны енәйәтсе итеп күҙ алдына килтереү мөмкин түгел.

- Улар мине ебәрмәҫ өсөн шулай итә. Әммә барыбер китәсәкмен! Төрмәгә ултырғым килмәй. Аҡса килтереп һалмаһам, ситлеккә ябыу менән янайҙар. Эшләй алмайым мин уларға, ҡурҡам.




Ирғәле араҡыһын ҡойҙо ла эсте, ҡойҙо ла эсте. Иҫерҙе. Теле көрмәлеп, нимә һөйләгәне лә аңлашылмай башланы. Резедаға уны үҙенең карауатына һөйрәп һалыуҙан башҡа сара ҡалманы. Төнө буйы керпек тә ҡаҡмай уйланып сыҡты Резеда. Ниңә, ниңә генә ундай әҙәмдәр менән бәйләнде икән? Аҡсаларына ҡыҙыҡтымы? Үҙе лә белмәйенсә бына ниндәй бүләктәргә кинәнгән икән ҡыҙ!

Ул араларҙа Ирғәленең һөмһөрө ҡойолоп йөрөнө. Йүнләп һөйләшмәне, Резеда янына килмәне. Резеда үҙе лә һөйгәне тураһында уйлап, ни эшләргә белмәй өҙгөләнде. Имтихандарға йүнләп әҙерләнә алманы, күбеһен насар билдәләргә тапшырҙы. Ирғәле аҡса таба алмаған, артабан да шул эшендә ҡалған, тик хәҙер ҡасан, ҡайҙа, нимә эшләргә ҡушалар, баш тартырға хаҡы юҡ. Шулай итеп, тегеләрҙең тоғро этенә әйләнде.

Имтихандар тамамланғас, Резеда ҡайтып китергә ҡарар иткәйне лә, Ирғәле ялбарғас, ҡалды. Сумкаларын тейәп, уның ятаҡтағы бүлмәһенә күсте лә барҙы. Уға ысынлап та терәк, иптәш кәрәктер, ауыр сағында янында булайым, тине. Бер йәй ауылға ҡайтмағандан үлмәҫ әле. Былай, исмаһам, һөйгәне янында була. Бигерәк тә ошо уй ҡалырға мәжбүр итте уны баш ҡалала. Шул мәлдә тормошо ниндәй боролош алырын белһә икән! Ул ваҡытта яңылышыуҙар ҙа, хаталаныуҙар ҙа булмаҫ, барыһы ла дөрөҫ барыр, бәхетле йәшәрҙәр ине. Әммә... Бер көн уйламағанда уларға әлеге Сәйет килеп инде. Резеда, иренең етәксеһе килгәс, өҫтәл әҙерләне. Инеп-сығып йөрөгән арала Сәйеттең үткер ҡарашының тәненең әле бер, әле икенсе өлөшөнә төбәлеүен тойҙо. Ытырғанды. Мөмкин булһа, өйөнә аяғын да баҫтырмаҫ ине әҙәм аҡтығының, елкәһенән алып ҡына ишек артына баҫтырыр ине, хәленән килмәй. Бына кемдәр ҡурҡытып тота уның Ирғәлеһен. Бандит икәне йөҙөнә үк сыҡҡан бит. Тәү күреүҙән уны һөйһөнмәне Резеда. Аңлауынса, башҡортса һин дә мин һөйләшеп йөрөһә лә, кавказ яғы кешеһе ине. Ошондай улы булған әсә кешене күргеһе килде.

Ирғәле тулыһынса уларҙың йомошсоһона әүерелде. Һуңлап ҡайтты, бер нисә көн юғалып тороуы ла ғәҙәти хәлгә әйләнде. Йә булмаһа аҙналар буйы бер ҡайҙа ла сыҡмай өйҙә йәшеренеп ятты. Ҡайһы ваҡыт кәйефе шул тиклем шәп: Резеданы саҡ ҡулында күтәреп йөрөмәне: бүләктәр ташыны, иң ҡиммәтле рестарандарға саҡырҙы, матур һүҙҙәр һөйләп, хыялдарға бирелделәр. Һөмһөрө ҡойолоп ҡайтһа инде өндәшмәүең, эргәһендә йөрөмәүең хәйерле. Холҡоноң шулай кинәт үҙгәреүе аптыратты ҡыҙҙы. Эше, дуҫтары тураһында һорашып ҡараһа ла, белмәгәндең беләге тыныс, тынысыраҡ йоҡларһың, тип бер ни ҙә һөйләмәне. Кеше бөтөн нәмәгә лә күнегә, хатта насарына ла. Резеда ла өйҙә ултырырға өйрәнде. Күңелһеҙлектән тотош китапхананы уҡып сыҡҡандыр. Бәйләм бәйләп маташты, беше-ренде-төшөрөндө - шулай көн үткәрҙе. Әхирәттәренә йөрөргә Ирғәле ҡушманы. Унан, Резеданың үҙенең дә теләге һүрелде. Саф һауаға ла һөйгәне менән генә сығырға тырышты. Ирғәленең кемдән ҡурҡыуын, нимәләр өсөн туҡтауһыҙ хафаланыуын аңлай алманы. Көҙгөләккә ситтән тороп уҡыуға күсәһең дә, ауылыңа ҡайтып китәһең, тип барҙы уға Ирғәлеһе. Туй үткәрергә лә ҡаршы төштө. "Бәхетһеҙ иткем килмәй үҙеңде. Ғүмер буйы минең менән ҡасып-боҫоп йәшәмәҫһең, бына ҡайтып китерһең, барыһы ла онотолор, ваҡыты еткәс, тиңеңде лә табырһың..." - тип әллә нимәләр һөйләне. Ә Резеда уның һүҙҙәрен башына һыйҙыра алманы: нисек инде ситтән тороп уҡырға? Бигерәк тә ауылға ҡайтып китергә? Атаәсәһе, таныш-тоноштары ни әйтер? Ғәрлек бит! Өфөлә генә ҡалһа, булмаймы ни? Аңламаған шунда Ирғәленең уны ҙур бәләнән һаҡлап ҡалырға тырышҡанын. Тыңламаны уны Резеда, ятаҡҡа ла күсмәне, уҡытыусы булып эшләйһе эшем юҡ барыбер тип, уҡыуын да ташланы. Ирғәленең килтергән аҡсаларын услап тотоп, рәхәт йәшәйем тип алданып, уның әлеге бүлмәһендә ҡалыуҙы хуп күрҙе. Әсәләрен яҡшы, аҡсалы эш таптым, шуға ҡайта алмайым, тип алданы. Хәҙер һеҙгә ярҙам итә алам тип, Ирғәленән йәшереп аҡса ла һалғыланы.

Бер көн Ирғәле тап теге ваҡыттағы, ятаҡҡа килеп ингәндәге ҡиәфәтендә ҡайтты. Быныһында аяғында ла баҫып тора алмаҫлыҡ иҫерек ине. Бу-

штан юҡҡа ғәфү үтенде, иланы, Резеданы ҡосаҡларға маташты. Сәбәпһеҙгә шулай ҡыланмаған икән. Икенсе көнө, йоҡоһонан уянғас, Резедаға күтәрелеп ҡарамай ғына, кейенергә бойорҙо. Үҙе менән иң кәрәкле әйберҙәрен дә алырға ҡушты. Ҡыҙ албырғап ҡалғас, теш щеткаһын, күлдәк-салбарҙарын, документтарын сумкаға үҙе тултыра башланы. Тәүҙә Резеда уға, һаман айнығып бөтмәгән, ахырыһы, тип көлөп ҡараны, Ирғәленең кисәге хәлен һөйләп, уны көлдөрөргә маташты. Әммә тегеһе шаярырға йыйынманы - йөҙө үтә лә етди ине.

- Һин хәҙер бүтән ерҙә йәшәйәсәкһең, - тине ул Резеда кейенеп, сумкаһын ҡулына алғас ҡына. Тағы ниҙер аңлатып торманы.

Был көндө ғүмерҙә лә онотасағы юҡ Резеданың. Тәүге тапҡыр хыянат менән күҙгә-күҙ осрашты. Күңелен нәфрәт биләне. Йәшәргә теләмәүҙең, тормоштан ваз кисеүҙең ни икәнен дә тәүгә татыны. Бына ошо мәлдән Ирғәле генә түгел, Резеда ла ҡолға әйләнде. Ирғәле һатты уны. Эйе, эйе, тәүҙә үҙенең йәнен, аҙаҡ килеп Резеданыҡын. Йәшәргә ынтылыш бына ни эшләтә кешене! Кәрәк булһа, әсәһен дә ыһ та тимәй һатыр ине моғайын. Иң мөһиме - уға теймәһендәр, уға һәйбәт булһын. Ҡалғандарҙа эше юҡ. Үҙенең йәне бик ҡиммәт инеме һуң? Юҡ, кәрәклеге һуҡыр бер тингә ла торманы. Һура алған тиклем һурҙылар ҙа, файҙаһы ҡалмағас, үле кәүҙәһен сығарып сүплеккә ырғыттылар. Әҙәмсә ерләнмәне лә бит, исмаһам.

Сәйет Ирғәлегә ингеләгән мәлдә юҡҡа ғына Резедаға тишерҙәй итеп ҡарамаған икән, ауылдан яңы ғына килгән, нимә тиһәләр ҙә ауыҙ асып ышанған, балалыҡтан саҡ сыға башлаған алсаҡ ҡыҙға шунда уҡ ҡармаҡ һалып ултырған булып сыҡты. Ирғәле сираттағы ауыр хәлгә тарығас, Сәйет ярҙам ҡулы һуҙған, тик әжеренә Резеданы һораған. Ҡатын итеп түгел, үҙ нәфсеһен ҡәнәғәтләндерер өсөн. Үҙенекен генә түгел, ҡәҙерле ҡунаҡтарының, яҡын дуҫтарының күңелен күрер өсөн. Уларға рәхмәт йөҙөнән бер төнгә бүләк итә ине ул Резеданы. Ҡасан, кем менән килә, ҡыҙ һәр ваҡыт уны әҙер килеш көтөп ултырырға тейеш. Резеданың хис-тойғолары һүнде, шатланыу, ихлас көлөү, бүтәндәр менән аралашыуҙың ни икәнен онотто. Ҡасырға, ҡотолорға теләге булды, әммә ҡурҡты. Унан, мәғәнәһен дә тапманы. Барыбер табасаҡтарын белә ине ул. Китеп тә ҡайҙа бараһың? Белеме лә, йәшәр урыны ла юҡ... Шулай ҙа, эсендә ҡайнаған асыу, рәнйеү уны бер көн килеп үс алырға этәрҙе. Шул теләге генә артабан йәшәүгә өмөт уятты. Донъянан киткән хәлдә лә Сәйетте үҙе менән алып китергә тейешлеген йөрәге менән аңлай ине ул. Уларға кеше яҙмышы менән уйнарға хоҡуҡ бирелмәгәндер бит? Һәр яҙаны урап үтә алырлыҡ шул тиклем улар кем? Тағы күпме кешенең башына етеп, зар илатырҙар?

**(Дауамы. Башы 20-22-се, 24-25-се һандарҙа).**

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

**Һуңғы йылдарҙа халыҡ үҙенең изгеләрен, дин юлына әйҙәүсе бөйөк заттарын иҫкә төшөрә, уларҙың тормошон өйрәнә, ҡәберҙәренә зыярат ҡыла, рухтарына аяттар уҡыта башланы. Был тәбиғи, сөнки һәр кем ҡасан да булһа үҙ булмышына әйләнеп ҡайта, көнөлдәр сафлыҡҡа, яҡтылыҡҡа ынтыла. Әүлиәләр иһә ана шул паклыҡҡа тулыһынса өлгәшкән өлөшлө бәндәләр булған. Һәм улар тураһында күберәк белгән һайын, күңел таҙарына, яҡтыра барған һымаҡ. Урал һырты буйлап йондоҙ һымаҡ һибелгән беҙҙә әүлиә ҡәберҙәре. Бындай изге урындар Башҡортостандың һәр ауылында тип әйтерлек бар. Әйтәйек, Өршәк йылғаһы буйында ла байтаҡ улар. Шуларҙың береһе - Йәғәфәр ишан ерләнгән зыярат.**

# Йәғәфәр ишан

Изге зыярат Ауырғазы һәм Дәүләкән райондары сигендә, Өршәк йылғаһынан өҫтәрәк, Тимәшкә ауылынан 2-3 саҡрым ерҙә урынлашҡан. Ҙур ғилем эйәһе һәм дин әһеле, көслө табип булараҡ даны таралған Йәғәфәр ишан ерләнгән унда. Мәңге йәшел мөһәбәт ҡарағайҙар үҙҙәренең тере һыны менән был изге урынды йәнле кәшәнәгә әйләндергән. Ике быуатҡа яҡын кеше аяғы өҙөлмәй был ерҙән.

Ишан 1747 йылда тыуып, 1824 йылда донъя ҡуйған. Уның тураһында яҙма сығанаҡтар ҙа бар. Атаҡлы ғалим һәм мәғрифәтсе Ризаитдин Фәхретдинов уны үҙенең "Аҫар" китабында телгә ала. Ундағы мәғлүмәттәрҙе ғәрәпсәнән башҡортсаға филология фәндәре докторы, профессор **Зәйтүнә Шәрипова** тәржемә иткән: *"Йәғәфәр ишандың сығышы хаҡында китапта шулар яҙылған, - ти Зәйтүнә Яхъя ҡыҙы. - Йәғәфәр бин Ғәбди /ҡайһы бер урында Ғәбид/, бин Исхаҡ, бин Ҡотләхмәт, бин Нуриман, башҡорт ҡәбиләһенән иҡәнлеген айырым әйтеп китә. Асыл, сығышы - Өфө эргәһендәге Шишмә тимер юлынан 10 саҡрым ғына ятҡан Сәфәр ҡәрйәһе. Ҡәбере - Өршәк йылғаһының уң яҡ ярындағы Тимәшкә ауылы янында. Уның Мәғрифә һәм Сәғиҙә исемле ике ҡатыны була, бәрәүһе - шул заманда бик данлыҡлы Лоҡман хакимдың бер туған һеңлеһе, Усман старшинаның ҡыҙы. Һимауин, Ҡотғүин исемле улдары, Фатима, Фәтхесрур тигән ҡыҙҙары һәм башҡа балалары була".*

Шуны ла әйтеү кәрәк, 1910 йылдың йәйендә Ризаитдин Фәхретдин үҙе был яҡтарға килеп, Лоҡман кантон һәм Йәғәфәр ишан ҡәберҙәренә зыярат ҡыла. Кантон башлыҡы Лоҡман - Йәғәфәр шәйех тәрбиәләгән мөриттәрҙең береһе, үлгәс, үҙен остазы янына ерләргә ҡушҡан. Ишандың ҡәбер ташын Лоҡман хаким ҡуйҙырыуы бәхәсһеҙ. Сөнки ошондай уҡ ташты ул, 1813 йылда вафат булып, Иҫке Мераҫ ауылы зыяратына күмелгән атаһы Усман кантондың баш осона ла ҡуйҙыра. Усман Ибраһимов та билдәле шәхес. Ауырғазы районындағы Усман /Ҡаҙмо-рон/ ауылы уның исемен йөрөтә. Ризаитдин Фәхретдинов үҙенең Ғәбдрәшит һәм Ғәбдрахман тигән улы менән Йәғәфәр ишандың ҡәберенә барып, зыярат ҡылыуын теркәп ҡалдырған. "Ҡәбере ныҡ ҡараулы, матур таш ҡуйылған, суйын ҡойма менән уратылған. Туғандары һәм шәкерттәре уға бик ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә икән", тип яҙған ул.

Йәғәфәрҙең атаһы мәрхүм булғас, әсәһе Балтас Ғәкәшә исемле кешегә кейәүгә сығып, шул кешенең тәрбиәһендә үҫә. Әсәһе бик тәрбиәле, уҡымышлы зат була, белемгә зирәк Йәғәфәрҙе күрше Сыуалҡып ауылындағы данлыҡлы Нуриман ишанға уҡытырға бирәләр. Шунан һуң ул Бохарала, аҙаҡ Ҡабул яғында белем туплап, үҙ яғына ҡайта һәм ғүмеренең ахырынаса Дим, Өршәк буйҙарында йәшәй, мәҙрәсә асып, бик күп шәкерттәр һәм мөриттәр тәрбиәләй. Яҡташтары һөйләүе буйынса, Йәғәфәр ишандың мәсете һәм мәҙрәсәһе хәҙерге Дәүләкән районының Мераҫ ауылында булған. Үҙе ул Яппар Йәнбөк ауылында йәшәгән. Уның йорт нигеҙе әле лә ҡоромаған. Унда әлеге көндә кинйә улы Хәлит һалып биргән ҙур йортта 85 йәшлек Гөлйыһан өбей Һағынбаева йәшәй.

Йәғәфәр ишан тураһында халыҡта бик күп риүәйәттәр йәшәй. Ғәжәйеп бер тылсым эйәһе, бер өшкөрөүҙә ауырыуҙарҙы сәләмәтләндергән, бөтә нәмәне һыуға ҡарағандай белеп торған, тиҙәр. Әйтәйек, уның яҙғы ташҡында һыу аръяғында бер иптәше менән тороп ҡалғас, күҙ асып йомған арала ярҙың икенсе яғында булыуы, хаждан ҡайтып килгәндә ауырыу арҡаһында иптәштәренән тороп ҡалыуы, ләкин тегеләр ҡайтыуға бынын өйҙә йөрөп ятыуы тураһында әле булһа һөйләйҙәр. Йәғәфәр ишан суфыйлыҡ ғилемен иң юғары кимәлдә үҙләштергән ҙур дин әһеле, көслө ғилем эйәһе була.

*- Риза Фәхретдин уның шәкерт сағында уҡ төрлө кирәмәтлек һәләттәренә эйә булыуы хаҡында яҙа һәм бер нисә миҫал да килтереп китә,* **- ти Зәйтүнә Яхъя ҡыҙы.** *- Мәҫәлән, Бохарала уҡыған шәкерттәр йыш ҡына үҙҙәренең төбәп барған уҡытыусылары менән мөрхәтһенмәй, икенсе бер танылған шәйехҡә күсеп йөрөгән. Шундай ниәт менән йөрөгән бер шәкерт төш күрә, имеш, ҙур бер ҡарсыға килеп сығa ла, бер үләкһәне тырнаҡтары менән матҡып алып, ҙур күлгә алып барып ташлай. Шәкерт бик шомлана, төшөн бәрәүгә лә һөйләмәй, ҡаты уйланып йөрөй. Бер аҙ ваҡыттан уның янына Йәғәфәр килә лә "Төшөңдөң мәғәнәһен аңланыңмы инде? - тип һорай. Аптырап ҡалған шәкерткә былай ти: "Ул ҡарсыға мин инем, мин үҙемдең нәфсемде үләкһә сифатында алдым да ҙур күлгә - Мәғрифәт күленә ташланым, шул күлдә ул юҡҡа сыҡты",- тип фәһем бирә теге шәкерткә.*

*Йәғәфәр ишан сәфәр йөрөргә яратҡан. Үҙенең шәкерттәре, мөриттәре менән Ҡаҙан, Өфө, Пермь яҡтарындағы ауылдарҙа ил гиҙеп, белем, тәриҡәт таратып йөрөгән. Риза Фәхретдинов уның ҡайһы бер шәкерттәренең исемдәрен дә күрһәткән: Ғәббәс бин Ғәбдрәшит әл-Кушари, Рәхмәтулла бин Морат Баҡый-Тактауи, Наретдин бин Зәйнүш әл-Ҡалмаҡи, Ғәбделжәлил Мирсәлим Ахунди, Хәсән бин Әбүталип әл-Ғүмәри һәм башҡалар. "Ул сәсән телле, йор һүҙле, мәҙәксе зат булған. Һәм шуға бәйле бик күп латифалар /көләмәстәр/ нығынып ҡалған", тип тә яҙа Ризаитдин Фәхретдинов.*

Был күркәм зат тураһында татарҙың ҙур уҡымышлыһы Шиһабетдин Мәрҗәни ҙә яҙып ҡалдырған һәм уның тура һәм йор һүҙле булыуына миҫал итеп, бер булған хәлде лә теркәгән. Уҡымышлы татар заттары бергә йыйылғанда ҡайһылары үҙҙәренең мырҙа йәки дворян нәҫеленән булыуы хаҡында маҡтанышырға яратҡан, шундай мәлдәрҙең береһендә, Йәғәфәр ишан да һүҙгә ҡушылып китә, минең дә атайым ҡартайған көнөндә мырҙа булды бит, ти. Барыһы ла аптырашып ҡалғас, "Аҡылы бөттө, тәмәке тартты, шунан да артыҡ мырҙалыҡ буламы ни?" тигән. Был - үҙҙәрен, мырҙа нәҫеленәнбеҙ, тип маһайыусыларҙан зәһәр көләү ҙә, мырҙалыҡ һәм дворянлыҡ титулының халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыуҙан бигерәк, батша хөкүмәтенә ярағандарға бирелеүенә кинәйә лә булған. Мырҙалар шул титул менән бергә урыҫтың динһеҙлеген дә, насар ғәҙәттәрен дә ҡабул итеүселәр булған бит. Һәр хәлдә, ҡайһы бер муллаларға хас ике йөҙлөлөктән суфый шәйехтәре азат булған, тап ана шул тура һүҙлелек, ихласлыҡтары өсөн кешеләр уларға ышанған һәм эйәргән дә инде.

Әүлиәләрҙең көсө улар үлгәс тә ҡала, тип ышана халыҡ. Шуға күрә ауырығанда ишан зыяратына барып, рухынан ярҙам һорағандар, улай ғына түгел, хатта алыҫ ерҙәрҙән мосолмандар кесе хаж ҡылырға килгән... Элек зыяраттан үрҙәрәк Ҡыҙылғы тигән ауыл булған. Хәҙер ул бөткән. Шунда тыуып үҫеп, әлеге көндә Ишле ауылында йәшәгән, ғүмере буйы ишан рухына, уның ярҙамына ышанып көн иткән **Мәүсилә Ниғмәтуллина** һуғыштан һуңғы йылдарҙа булған бер хәлде асыҡ хәтерләй: *"Беҙҙең өй ауылдың иң осонда ине, зыярат - ҡаршыбыҙҙа ғына. Әсәйем ишекте бикләргә ҡушманы, сөнки ишан зыяратына килгән кеше туп-тура беҙҙән өйгә килер ине. Ҡартатайбыҙ биш улын яуға оҙатты, әсәүһе кире ҡайтманы, шул ауыр йылдарҙа ла зыяраттан кеше өҙөлмәне. Бер саҡ шулай, миңә дүрт-биш йәштәр самаһы булғандыр, өйөбөҙгә дүрт әбей килде керҙе. Йонсоғандар, кейемдәре туҙған. Улар мине арҡамдан һөйөп яраттылар ҙа, Мәскәү ҡалаһынан йәйәү килдек, хаж иҫәбенән, тинеләр. Хаж, тигән һүҙҙе шунда беренсе ҡабат ишеттем. Сисенеп, йыуынып, өҫ-баштарын таҙартып, зыяратҡа барып, беҙҙә ике кис ҡунып киттеләр. Күп киләләр ине, дөйөләр менән килгәндәрен дә хәтерләйем әле.*

Күпме тарихи кисерештәр, юғалтыуҙар, тыйыуҙарға ҡарамаҫтан, халыҡ ике быуат буйы изге зыяратҡа эҙ һыуытмаған, әүлиә рухына ышаныусын, уның тураһындағы иҫтәлектәрҙе күңелендә һаҡлаған. Был, бәлки, суфый шәйехенең үҙенән һуң да ул өйрәткән тәриҡәттә дауам итә алырлыҡ көслө шәкерт-мөриттәрен әҙерләп ҡалдыра алыуы менән дә бәйлелер. Быға дәлил - Мераҫ ауылы зыяратындағы "Шәкерттәр ҡәберлеге" быға дәлил. Йәғәфәр әүлиәнең уҡыусылары, мөриттәре ерләнгән унда.

Ишан зыяратына кешеләр бөгөн дә килә. Уның рухына аят уҡып, Хоҙайҙың яратҡан ҡолон хөрмәтләгән өсөн ҙур сауап ала. Ләкин күңелде китеп торған бер нәмә тураһында ла әйтмәй булмай - ҡайһы берәүҙәр уның ҡәберенә хәйер һала, ағастарына сепрәк бәйләп китә. Был Исламға хас булмаған күренеш, ти дин әһелдәре, әрүахтән ярҙам һорау ҙа дөрөҫ ғәмәл түгел, ярҙамды беҙ әүлиәләр хөрмәтенән Аллаһы Тәғәләнән һорарға тейешбеҙ. Зыярат эсендә ҡалдырылған ишан бабайға төбәп яҙылған хаттар, бәйләнгән сепрәктәр аҙаҡ ҡайҙа була, зыяратты кем таҙарта /уның бит махсус кешеләре юҡ, был һәр кемдең намыҫ эше/, шул турала ла кешеләр уйланһын ине. Әйткәндәй, ҡәбер ташындағы уйым хәйер һалырға түгел, ә шунда ямғыр һыуы йыйылып, ҡоштар эсһен һәм һандуғастар һайрап ултырһын өсөн эшләнә, тигәнде лә ишеткән бар оло кешеләрҙән. Моғайын, дөрөҫтөр.

"Ишандың ҡойоһо һәм ағып ятҡан шишмәһе лә булған, һыуын эсер өсөн генә тотона инек, изге һыу, тип әсәйҙәр кер, иҙән йыуҙыртмай ине", тип һөйләгәйне Мәүсилә апай. Ләкин 60-сы йылдарҙа тирә-яғын һөрөү арҡаһында шишмә юғалған. Шатлыҡҡа ҡаршы, 2008 йылда ауырғазылар, атаҡлы шәйехтең ҡойо урынын табып, таҙартып, бурап, ҡыйыҡ япма эсенә алғандар. Хәҙер уның шифалы һыуы халыҡты сихәтләндерә.

Ишандың зат-нәҫелдәре тураһында хәтәр замандарҙа өндәшмәү хәйерлерәк булғанлыҡтан, күп мәғлүмәттәр ергә һеңгән. Шулай ҙа был тирәләге башҡорт ауылдарында ишан тоҡомдары барлығын халыҡ белә. Усман кантон исемен йөрөткән Усман /Ҡаҙморон/ ауылында йәшәүсе **Рафиҡ Ҡотлоюлов** шуларҙың береһе. Уның ҡартатаһы /әсәһенең атаһы/ Рамазанов Муса Шәймәрҙән улы Йәғәфәр олатайҙың өсөнсө быуын ейәне. ***"Ҡартатайым һуғыштан ҡайтмаған, биш бала менән ҡалған өләсәйемде 1944 йылда колхоздың бер кесә игенен алғаны өсөн дүрт йылға төрмәгә ябалар. Балаларҙың иң өлкәне 16 йәшлек Миңлегөл /беҙҙең әсәйебеҙ, быйыр ғына баҡыйлыҡҡа күсте/ бәләкәй туғандарын аска үлтермәй, дүрт йыл буйы яңғыҙы ҡарай. Ул бик эшсән, намыҫлы булды, йыш ҡына беҙгә, балаларына: "Беҙҙең йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәгеҙ, һеҙ - ишан балалары", - тип әйтә торғайны. Шунан ғына беләбеҙ. Ишан зыяратына барғанда әсәйемдең ҡәбер ташын һыйпап илағанын да хәтерләйем. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, нишләптер беребеҙ ҙә ныҡлап һорашып ҡалмағанбыҙ. Хәйер, ул заманда ишан затынан булыу ғорурлыҡ тойғоһо тыуҙырмағандыр инде, уҡыған китаптарыбыҙҙа гел уларҙан көләләр ине бит... "***

Рафиҡтың өйөндә өләсәһенән ҡалған бик күп боронғо китаптар һаҡлана, араһында быуындан-быуынға күсеп килгән ҡомартҡы - көҙә тиреһенән эшләнгән күн менән көпләнгән китап бар. ***"Нәҫелдән-нәҫелгә тапшырылып килгәс, ишан ҡарттайыбыҙҙан ҡалғандыр, тип уйлайбыҙ инде, - ти Рафиҡ. - Үкенес, ун йыл мәктәп, аҙаҡ ҡайһыларыбыҙ вуз тупһаларын тапаһаҡ та, ҡартатайҙарыбыҙҙың беҙгә тип ҡалдырған рухи мираҫтарын уҡый алмайбыҙ".*** Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Рафиҡтың ғына үкенесе түгел шул был.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уҙған йәй республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән дин әһелдәре, ябай мосолмандар Хәйбулла районының Вәлит ауылында - Ғатаулла ишан, Баймаҡ районының ике ауылында, йәғни Муллаҡайҙа - Ғабдулла ишан, Манһырҙа Мәжәүир хәҙрәттәр ҡәберҙәренә зыярат ҡылды, ҡөрьән аяттары уҡыны. Һәм, моғайын, ошо йыйындарҙа ҡатнашыусыларҙың береһендә лә, ни өсөн беҙ был ишандарҙы иҫкә алабыҙ һуң әле, тигән һорау тыумағандыр, киреһенсә, нисек беҙ уларҙы әлегә тиклем белмәгәнбеҙ, тигән уй тынғылыҡ бирмәгәндер. Әйтәйек, ни өсөн Октябрь революцияһына тиклем дин ғилеме менән бергә география, физика, химия кеүек фәндәрҙе лә өйрәткән, йыл һайын үҙендә 300-400 шәкерт уҡытҡан Муллаҡай мәҙрәсәһен, унда ҡырҡ йылдан ашыу мөҙәрислек иткән, 14 телдә уҡый-яҙа белгән, йәшерен ғилем серҙәренә эйә Ғабдулла Сәиди хаҡында беренсе ҡабат ишетәбеҙ? Хәйер, бында сер юҡ: үндай мәғлүмәттәр, халҡыбыҙ наҙан булған бит, тигән идеяны үткәреүгә, халыҡты диненән, милләтенән ваз кистерергә ҡамасаулар ине.**

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

✓ *Урамдан үтеп барғанда ғына бер ҡулына тәмәке, икенсе ҡулына һыра шешәһе тотҡан әллә күпме үҫмер ҡыҙҙарҙы осратырға мөмкин. Уларҙы буласаҡ әсәләр тип әйтергә тел дә әйләнмәй хатта!*



ӘЙТӘГҮР!

**Бөгөн ил кимәлендә демография, халыҡ һанын арттырыу кәрәклеге хаҡында күп һөйләнелә. Һүҙ ҙә юҡ, мәсьәлә һис ҡасан булмағанса киҫкен тора: матбуғат биттәрендә йыш ҡына тыуым менән үлемде күрһәткән график һүрәтләнеште кеше ғүмерҙәрен киҫеүсе ҡайсыға ла, тәрегә лә оҡшата башланылар. Сөнки тыуым - кәмеүгә табан, ә үлем һыҙығы юғарыға үрләй барып, икеһе координат нигеҙендә киҫешкәс, артабан үҙ юлдарын дауам итә барып, ҡайсы йә булмаһа тәре һүрәтләнеше хасил булды. Демографик кризис һәм уның сәбәптәре бик күп. Төп сәбәптең, әлбиттә, илдәге социаль-иҡтисади йәшәү кимәленә бәйле икәнлеге берәүгә лә сер түгел. Һуңғы ваҡытта демография мәсьәләһен ҡатын-ҡыҙ һаулығына бәйле ҡарау өҫтөнлөк итә. Улай ғына ла түгел, шуныһы ҡыуандыра: ҡатын-ҡыҙҙарҙың бала тыуҙырыу һәләтенә ыңғай йоғонтоһо булған бик күп аныҡ һәм файҙалы эштәр башҡарыла. Ошо йәһәттән Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 2003 йылғы ҡарары менән ойошторолған Республика перинаталь үҙәге эшмәкәрлеген телгә алмау мөмкин түгел. Ошо үҙәктең бүлексә мөдире, юғары категориялы врач-акушер, БР-ҙың атҡаҙанған табибы, медицина фәндәре кандидаты Илдар Рафиҡ улы СЫРТЛАНОВ ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙары һәм уларҙы иҫкәртеү саралары, түлһеҙлек проблемалары һәм уны дауалау мәсьәләләре буйынса гәзит уҡыусыларҙың ҡайһы бер һорауҙарына яуап бирә.**

# ӘСӘ БУЛЫУ БӘХЕТЕ...

## әхлаҡлылыҡ аша килә



**▸ Илдар Рафиҡ улы, бөгөн ил, дәүләт кимәлендә бала табыу һәләтенә бәйле ҡатын-ҡыҙ һаулығы мәсьәләһе ҙур борсолоу тыуҙыра. Яңыраҡ ҡына ошо проблема буйынса үҙәк гәзиттәрҙең береһендә дәрәжәле медицина әһелдәре, социаль сәйәсәт һәм һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә эшләүсе етәкселәр һәм депутаттар ҡатнашлығында һөйләшеү булып үткәйне. Унда яңғыраған һандар һәм мәғлүмәттәр иҫ китерлек: ил буйынса бала ятҡылығы яман шешенән йыл һайын 44 мең ҡатын һәләк була икән, шуларҙың 70 проценты - 30-ҙан алып 55 йәшкә тиклемгеләр. Республика перинаталь үҙәгендә ана шундай яман сирҙәрҙе иҫкәртеү буйынса ниндәй йүнәлештә эш алып барыла?**

- Мәсьәлә бик киҫкен тора, әлбиттә. Беҙҙең перинаталь үҙәк бер нисә йүнәлештә эшләй. Иң тәүҙә беҙ ғаиләне планлаштырыу, ҡатын-ҡыҙҙарҙың бала табыу һәләтлегенә булышлыҡ итеү, енси юлдар аша бирелә торған сирҙәрҙе иҫкәртеү, нәҫелдән һәм тыуымыштан килгән ауырыуҙарға, уларҙың ғаиләләренә медицина-генетик тикшеренеүҙәр үткәреү, һәр төрлө акушер һәм экстрагениталь сирле ауырлы ҡатындарҙы амбулатор һәм стационар шарттарҙа дауалау, шулай уҡ ирҙәр һаулығын күҙәтеү эштәрен алып барабыҙ.

Һеҙҙең һорауға ҡағылышлы шуны билдәләп үтер инем: репродуктив (бала табыу) ағзалары яман шеше менән сирләүсе ҡатын-ҡыҙҙар, мәғлүм булыуынса, ошо йүнәлештәге башҡа төр медицина учреждениеларында дауалана. Беҙҙең перинаталь үҙәктә иһә буласаҡ әсәләрҙә ана шундай сирҙәрҙе булдырмау, теге йәки был патологияны мөмкин тиклем иртәрәк асыҡлау һәм ауыры төшөү хәүефен иҫкәртеү хәстәре күрелә. Йөклөлөк патологияһы акушер бүлексәһендә нигеҙҙә ауыры төшөү хәүефе янаған йә булмаһа ошоға тиклем ауыры төшөү осраҡтары булған ҡатындар дауалана. Улар бөтә ауырыуҙар һанының 70-80 процентын тәшкил итә. Ҡалған төр патологиялар яралғы үҫешмәгән йә ул ғәрип хәлдә булған, бала ятҡылығынан тыш йөклөлөк осраҡтарына ҡағыла. Бер нисә тапҡыр ауырға ҡалып та әсә була алмай интеккән ҡатындар ҙа беҙҙә дауалана.

**▸ Мәғлүм булыуынса, ғаилә иштәренең түлһеҙ булыуы ҡатындар һаулығына ғына бәйле түгел. Ошо йәһәттән ирҙәр сәләмәтлегенә ҡағылышлы ниҙәр әйтерһегеҙ?**

- Перинаталь үҙәк, ысынлап та, ирҙәр сәләмәтлеге хаҡында ла хәстәрлек күрә: ир-егеттәр беҙҙең андролог үҙәгенә мөрәжәғәт итә ала.

Әгәр ир менән ҡатын бер йыл буйы һаҡланыу саралары күрмәйенсә даими енси тормош алып барған хәлдә лә ҡатыны ауырға ҡалмаһа, был түлһеҙ ғаилә тип классификациялана. Бындай осраҡтарҙа оҙаҡҡа һуҙмай тикшерелә башлау кәрәк. Бөгөнгө көнгә балаһыҙ ғаиләләр түлһеҙлегенең 50 проценты - ҡатындарҙан, 50 проценты - ирҙәрҙән. Әйткәнемсә, ир-егеттәр сәләмәтлеге лә табиптарҙы борсоуға һала. Был, әлбиттә, уларҙың тормош рәүешенән, мәктәп йылдарынан килә. Армияға бармаған егеттәрҙең, өлкән класс үҫмерҙәренең һаулығы хаҡында саҡырыу комиссияһына яҙылған һығымталарҙан күренеүенсә, уларҙың сәләмәтлек торошо шәптән түгел. Шулай ҙа була: ҡарап тороуға мөһәбәт, таҙа ирҙәрҙең спермаларына тикшереү үткәргәндә, уларҙың бик етди сирҙәре табыла тора. Уларҙың сперматозоидтары аталандырыуға һәләтһеҙ булып сыға. Хәҙер ирҙәрҙең күбеһе простата биҙе аденомаһы, простата биҙе ялҡынһыныуы менән яфалана. Беҙҙең үҙәктә ундайҙарға "Простасан" микротулҡынлы трансуретраль терапия аппаратында һөҙөмтәле ярҙам күрһәтелә.

**▸ Түлһеҙлектең тағы ниндәй сәбәптәре бар?**

- Иң күп таралған сәбәптәрҙең береһе - хламидиялар, микоплазма, уреаплазма, трихомоноз, гонорея кеүек енси юл менән бирелә торған йоғошло сирҙәр. Хәҙер бит йәштәр күп уйлап тормай, бик иртә енси тормош башлайҙар, хатта мәктәп партаһы артынан сығып өлгөрмәгәндәре лә байтаҡ. Унан төрлө партнерҙар менән тәртипһеҙ енси бәйләнешкә инеү бик хәүефле фактор. Мәғариф, һаулыҡ һаҡлау органдары был йәһәттән балалар араһында туҡтауһыҙ аңлатыу эштәре, әхлаҡ һабаҡтары алып барырға тейеш, тип уйлайым. Ә инде төп әхлаҡ принциптары бала күңеленә, әлбиттә, ғаиләлә һалына. Ата-әсәләр балалары киләсәгенә иғтибарлыраҡ булһын ине: спиртлы эсемлектәр эсеү, тәмәке тартыу, наркоманлыҡ кеүек социаль афәт күренештәре лә сәләмәт бала табыу файҙаһына түгел. Урамдан үтеп барғанда ғына бер ҡулына тәмәке, икенсе ҡулына һыра шешәһе тотҡан әллә күпме үҫмер ҡыҙҙарҙы осратырға мөмкин. Уларҙы буласаҡ әсәләр тип әйтергә тел дә әйләнмәй хатта! Ҡатын-ҡыҙҙарҙың күрем циклы боҙолоуы уларҙы хафаға һалырға, тиҙерәк гинеколог, эндокринолог һәм башҡа белгестәргә күренеүҙе тиҙләтергә тейеш. Тағы ла бер етди сәбәп: аборт проблемаһы. Әлеге лә баяғы әхлаҡ тигәндән, йәш кенә ҡыҙҙар кейәүгә сыҡмаҫ борон уҡ енси тормош башлай һәм ауырын алдырырға мәжбүр була. Тәүге ауырҙы алдырыу тулыһынса тип әйтерлек түлһеҙлек менән тамамлана, сөнки был бала тыуҙырыу ағзаларының ялҡынһыныуына, ә олоғая биргәс иһә миома, киста, эндометриоз һәм бала ятҡылығының яман шешенә килтереүе ихтимал.

**▸ Түлһеҙлектән дауаланыу ыңғай һөҙөмтә бирмәгән осраҡтарҙа ниндәй саралар ҡулланыла?**

- Республика перинаталь үҙәгендә тикшерелеп, дауаланыусы бик күп ҡатындарға беҙ әсә булыу бәхете бирәбеҙ һәм бының менән хаҡлы ғорурланабыҙ. Тик ни эшләйһең: дауалау файҙа бирмәгән осраҡтар ҙа бар, әлбиттә. Бындай сирҙәрҙең ҡатмарлы төрҙәре лә, үҙәккә һуң мөрәжәғәт итеү ҙә үҙ ролен уйнай. Бындай осраҡтарҙа түлһеҙ ғаиләгә медицина ярҙамының юғары технологиялы төрө - экстракорпораль аталандырыу (ЭКО) ярҙамға килә. БР Хөкүмәтенең 2009 йлыдың 26 майындағы ҡарары нигеҙендә былтыр, мәҫәлән, республика бюджеты иҫәбенә экстракорпораль аталандырыу буйынса 100 процедура башҡарылды. Тағы ла 30 процедура федераль квота буйынса һәм түләүле 202 процедура эшләнде. Улар һөҙөмтәһендә ауырға ҡалыу осраҡтары йылдан-йыл арта бара: 2006 йылда ул 31,8 процент тәшкил итһә, былтыр 40,6 процент. Әлеге көнгә ЭКО процедураһынан һуң 126 бала яҡты донъяға килде.

**▸ Илдар Рафиҡ улы, гәзит уҡыусыларҙан килгән бер нисә һорауға ла ҡыҫҡаса ғына яуап бирһәгеҙ ине? Республика перинаталь үҙәгендә дауаланыу тулыһынса бушлаймы?**

- Әгәр ҙә түлһеҙ иштәр райондарҙан, башҡа ҡалаларҙан йүнәлтмә алып килһә, күпселек тикшеренеүҙәр түләүһеҙ, ләкин гормондар, ҡайһы бер төр инфекцияларҙы тикшереү өсөн түләргә тура килә, сөнки улар беҙҙең лабораторияла эшләнмәй. ЭКО-ның республика Хөкүмәте бюджет иҫәбенә башҡарылған 100 процедуранан башҡаһы шулай уҡ түләүле (80-90 мең самаһы).

**▸ 16 йәшлек ҡыҙ бала бил нәҙеклеген һаҡлайым, тип, диета тота башлағас, уның айлыҡ күрем циклы килеүҙән туҡтай. Был зарарлымы?**

- Әлбиттә, зыянлы. Йәш ҡыҙҙарға, уларҙың әсәйҙәренә һүҙем шул: һәр ҡыҙ баланың 15 йәшендә уҡ даими күрем циклы тотороҡланырға тейеш. Был ҡыҙ баланы кисекмәҫтән гинеколог, эндокринолог кеүек белгестәргә алып йөрөргә кәрәк.

**▸ Кесарь киҫеме юлы менән тыуған бала ауырыуҙарға тиҙ бирешеүсән була, тиҙәр, был дөрөҫмө?**

- Әсәнең тәбиғи юл менән бала табыуына етмәй, әлбиттә. Бала көсөргәнеш аша үҙенә юл ярып килеп тыуа, тын ала, ҡысҡырып яр һалып илап та ебәрә. Баланы тәбиғи рәүештә көсәнеп табыуҙың үҙ тәғәйенләнеше бар, тимәк. Кесарь киҫеме иһә, башҡа сара булмағанлыҡтан, мәжбүри ысул. Уның сабый өсөн дә, әсә өсөн дә ҡатмарлыҡтар, проблемалар тыуҙырыуы ихтимал.

**▸ Ауырға ҡалырҙан алда буласаҡ сабыйҙың енесенә тәьҫир итеп буламы?**

- Әле мин һөйләп үткән ЭКО ысулы буйынса эш иткәндә - эйе. Ә тәбиғи юл менән бындай һөҙөмтәгә өлгәшеү мөмкин түгелдер, тип уйлайым.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әңгәмә ҡорҙо.**

### *АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

- Аҡса, тип йәнең атма, исемең һатма: аҡса һуҡырға тиң, ҡайҙа төртһәң, шунда бата, үҙеңде лә бергә һөйрәй.
- Егәрле бул, егәрлеләр алға елә ҡаршылыҡты еңә-еңә.
- Үсекмәгеҙ: үсеккән ир - ил сире, үсеккән ҡатын - өй сире.
- Йүнһеҙ бала ата-әсәһен талаштыра, йүнһеҙ ир бөтә ҡәүемен һуғыштыра.
- Ваҡҡа көйләнгән тирмән һәр саҡ ваҡ тартҡандай, ваҡсыл кеше лә ғүмер буйы ваҡ була, теңкәгә тейә.
- Алабарман булма - уның бар эше бергә болғана, осона ла сыға алмай, аҡыллылыҡы мәрйендәй теҙелеп кенә тора.
- Ҡулдарыңа хужа бул - гел алырға түгел, бирә лә белһендәр.
- Ҡунаҡҡа барғанда йөҙөң, һүҙең, ҡылығың үлсәүҙә булһын - улар кемлегеңде күрһәтә.
- Йәшәйештең алтын ҡалыбынан сыҡма - боҙоҡлоҡҡа бер аҙым ғына икәнен онотма.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# БАШҠОРТ МӨХИТЕНДӘ...

## эшҡыуарлыҡ сәме уятырға

**Башҡорт халҡының артабан яңырыуы һәм үҫеше хаҡында һүҙ барғанда, сәйәси, милли-мәҙәни, хоҡуҡи, социаль, демография мәсьәләләре менән бер рәттән, уның эшҡыуарлыҡ сифаттарының да үҫеш кимәлен көн тәртибенә ҡуймайынса булмай. "Урта синыф", йәғни эшҡыуарҙар ҡатламы үҫешен, уның мөмкинлектәрен дә барлау мотлаҡ, сөнки тап ошо мәсьәлә халҡыбыҙҙың заманға, баҙар шарттарына яраҡлашыуын, уның эшҡыуарлыҡ һәләтен асыҡларға ярҙам итә.**

Тотош алғанда, хужалыҡ итеүҙең баҙар системаһы шарттарында бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ йәмғиәтте тотороҡландырыусы төп көс булараҡ, үҙ хәлен һәм лайыҡлы тормош кимәлен үҙ аллы тәьмин итеүсе урта синыф өлөшөн арттырыуға булышлыҡ итә. Икенсенән, был яңы эш урындары булдырыуҙа, эшһеҙлек кимәлен кәметеүҙә, шуға бәйле йәмғиәттә социаль көсөргәнешлекте кәметеүҙә лә ҙур роль уйнай. **Шуға ла III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының эшҡыуарлыҡҡа арналған секцияһының эш төркөмө түбәндәге мәсьәләләрҙе ҡарауҙы көн тәртибенә ҡуйҙы:**

- Башҡорттар араһында бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ үҫешенең кимәле.

- Республиканың дөйөм эшҡыуарлыҡ потенциалында башҡорттар өлөшө.

- Башҡорттар араһында эшҡыуарлыҡ үҫешенә булышлыҡ итеүсе йәки аяҡ салыусы объектив һәм субъектив сәбәптәр.

- Эре башҡорт милли капиталы булмауының сәбәптәре.

- Башҡорт эшҡыуарлығын булдырыуҙа дәүләт ярҙамының роле.

- Башҡорт халҡы араһында эшҡыуарлыҡтың насар үҫеше, уның идея-әхләҡи ерлеге.

2009 йыл аҙағына республикала иҡтисади эшмәкәрлектең бөтә төрҙәрендә ҡатнашлыҡ итеүсе 125,5 меңдән ашыу бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары эшләп килә, шуларҙың 27,3 меңе - бәләкәй, 402-һе - уртаса предприятиелар, 93,2 мең шәхси эшҡыуар һәм 4,6 мең крәҫтиән (фермер) хужалығы. Улар араһында эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе башҡорттар нисбәте бик түбән. Башҡорттарҙың эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгәндәре лә, нигеҙҙә, шәхси эшҡыуарҙар, улар ваҡлап һатыу буйынса сауҙа өлкәһендә, ауыл хужалығы, төҙөлөш, эшкәртеүсе предприятиеларҙа эшләй. Ә бына банк өлкәһендә һәм башҡа финанс институттарында эшләүсе милләттәштәребеҙ бөтөнләй юҡ.

**Халҡыбыҙҙың эшҡыуарлыҡ өлкәһендәге баҙнатһыҙлығы, артта ҡалыуының сәбәптәре ниҙә һуң?**

- Төп сәбәп, шулай ҙа, йылдар буйы килгән административ-бойороҡ системаһы йоғонтоһонда тыуған башҡорт менталитетында, үҙ тормошон яҡшыртыуға, үҙенең ижади һәм эшҡыуарлыҡ мөмкинлеген бойомға ашырыуға йүнәлтелгән инициатива күрһәтергә теләмәүҙә.

- Халыҡ араһында ойошҡанлыҡ, милли эшҡыуарлыҡҡа йоғонто яһаусы милли институттар һәм инфраструктураларҙың булмауы.

- Тәүге капитал туплау осоронда башҡорттарҙың предприятиеларҙы хосусилаштырыу эштәренә идара итеүҙән ситтә тороуы, башҡорт халҡының дөйөм халыҡ милкен хосусилаштырыу емештәре менән файҙалана алмауы.

- Йәмғиәт тарафынан республикабыҙҙың дәүләтселеген билдәләүсе төп халыҡ булараҡ, башҡорттарҙың тотороҡлолоҡ ролен аңлап еткермәүе. Теләһә ниндәй дәүләттең төп терәге - ул ныҡ үҫешкән эшҡыуарҙар синыфы, бизнес-элита. Милли буржуазия, эре капиталдың булмауы барыбер ниндәйҙер дәрәжәлә республикабыҙ суверенитетының әһәмиәтен кәметә.

- Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ өлкәһендәге административ кәртәләр (энергетика, газ менән тәьминәт, сертификация, Роспотребнадзор, Ростехнадзор, архитектура, ер мәсьәләләре һ.б.).

**Башҡорт халҡының эшҡыуарлыҡ үҫешен тәьмин итеүҙең ниндәй юлдары бар һуң?** Беренсенән, шуны аңға һеңдереү кәрәк: башҡорт халҡының эшҡыуарлығын үҫтереүҙең нигеҙе - халыҡтың үҙендә. Халыҡ менталитетын эшҡыуарлыҡҡа ҡарата ыңғай мөнәсәбәткә йүнәлтергә. Башҡорт мөхитендә эшҡыуарлыҡ сәме уятырға. Беҙгә шуны ныҡлап төшөнөргә кәрәк: бер кем дә ситтән килеп беҙҙең тормошто яҡшыртмаясаҡ, үҙ яҙмышыбыҙҙың хужалары - беҙ үҙебеҙ. Эшҡыуар башҡорттоң ыңғай образын тыуҙырайыҡ. Һуңғы ике тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт эсендә баҙар шарттарында башҡорт эшҡыуарлығын үҫтереүҙең социаль нигеҙен тәшкил итерҙәй яңы йәш быуын үҫеп етте. Шул уҡ ваҡытта дәүләт, йәмғиәт эшҡыуарлыҡты үҫтереүҙә ярҙам күрһәтергә тейеш. Шуға ҡарамаҫтан, төп субъект булып эшҡыуар үҙе ҡала. Ул иң тәүҙә үҙенә, үҙ һәләтенә, булдыҡлылығына һәм талантына иҫәп тотһа ғына эше уң булыр.

**Хәҙерге шарттарҙа бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡтың үҫешендә перспективалы йүнәлештәр хаҡында бер нисә һүҙ.**

- Кооперация һәм аутсорсинг нигеҙендә яңы етештереү ҡеүәттәре булдырыу маҡсатында башҡорт эшҡыуарҙарының эре предприятиелар менән һөҙөмтәле аралашыуы.

- Инновацион бизнесты үҫтереү, башҡорт эшҡыуарҙарының фәнни потенциалын ғәмәлгә ашырыу иҫәбенә продукция етештереү, хеҙмәттәр күрһәтеү һ.б.

- Бәләкәй бизнес өлкәһенә йәштәр эшҡыуарлығы ресурстарын йәлеп итеү.

- Туризм индустрияһында эшҡыуарлыҡты үҫтереү.

- Һөнәрселек эшмәкәрлегендә башҡорт эшҡыуарлығын үҫтереү республикала халыҡ художество эшмәкәрлеген тергеҙеүгә, һөнәрселек продукцияһын һатыу күләмен арттырыуға булышлыҡ итер ине.

- Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә эшҡыуарлыҡты үҫтереү.

- Башҡорт халҡының күпселек өлөшө ауыл ерендә йәшәүен иҫкә алып, ауыл хужалығында эшҡыуарлыҡты үҫтереү сараларын күрергә.

**Иршат АҪЫЛҒУЖИН.**

БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ



### Эттәр йыйылышы

Ауылда балалар баҡсаһы эшләй, бөтәһе 50 бала йөрөй унда. Бер көндө ата-әсәләр йыйылышы үткәрҙеләр. Әминә лә әсәһе менән шунда бара. Ҡайтып килһәләр, урамдың эттәре бер ергә йыйылған икән. Ҡыҙыҡай уларҙы күреп: "Әсәй, эттәр ҙә йыйылыш үткәрәме?" - тип һорай. Кеше йәки йәнлектәр бергә йыйылһа, тимәк, йыйылыш була, тип уйлаған икән. Үҙ аллы булмаҡсы был ҡыҙ.

### Бер кемде лә индермә

Рәхимә апай дүрт балаһын өйҙә ҡалдырып, көн һайын эшкә китә һәм өлкән ҡыҙына ишекте элеп ултырырға, бер кемде лә индермәҫкә ҡуша. Бер көндө ике өй аша ғына йәшәгән өләсәләре килә. Ҡыҙ, әсәйем ҡушманы, тип, уны өйгә индермәй. Әсәй кешегә үҙ һүҙҙәренә төҙәтмә индерергә тура килә, Бынан һуң өләсәйгә ишек асыла. Был ҡыҙ ҡаты һүҙле һәм ата-әсә һүҙен тыңлаусан булып үҫә.

### Әней һатып алайыҡ

Ғәлиә еңгә менән Рауза апайҙар күрше йәшәйҙәр. Раузаны балалары "әней" тип йөрөтә. Рауза апай бухгалтер, аҡса эшләй, ә ул ваҡытта колхозда эш хаҡына аҡса юҡ ине әле. Ғәлиә еңгәнең Ғәлимә исемле ҡыҙы ҡайтып: "Әней һатып алайыҡ, ул аҡса эшләй, ә әсәй өйҙә тик ултыра", - ти икән. Эште ныҡлап аңлатҡас ҡына ҡыҙ үҙ яйына төшә. Был хәлде әле лә хәтерләп көләләр. Бала ни, аҡса кеше исеменә бәйле, тип уйлағандыр инде.

### Кәләш алам

Ноғман ағайҙарҙың өйө магазинға терәлеп кенә тора, ат, машина өҙөлмәй эргәләренән. Өс йәшлек улдары Таһир йә атҡа, йә машинаға ултыра ла, һис төшмәй. Хужалары уны аҡса биреп әүрәтеп, саҡ төшөрөп ала икән. "Аҡсаны ни эшләтәһең?" тип һораусыларға: "Кәләш алам, шуны ла белмәйҙәр", - тип яуаплай икән. Егет бит, бушҡа кәләш килмәҫен аңлаған.

**Әнүәрә ҒӘБДЕЛХАҠОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр

Бер ир-уҙаман, беҙ уны шартлы рәүештә мистер Смит тип алайыҡ, Теннеси штатындағы бәләкәй ҡалаларҙың береһендә йәшәүсе иң бай кеше була. Уның байлығы аҡсанан тормай. Улар ҡатыны менән социаль тәьминәт органдарынан килгән аҡсаға һәм ҙур булмаған пенсия пособиеһына һәүетемсә генә йәшәгәндәр.

Мистер Смит көнөн ҡош-ҡортто ашатыуҙан һәм эсереүҙән башлаған. Бер ваҡыт күршеһе унан ни өсөн үҙенең бәләкәй генә килеменең күп өлөшөн ҡош-ҡорт аҙығы өсөн тотоноуын һораған. Әммә мистер Смит быны юҡҡа ғына эшләмәгән -тотонған аҡсаһы үҙенә биш тапҡырға артып әйләнеп ҡайтҡан. Был ҡоштар ҡапҡа баштарында, ағас һәм ҡыуаҡ ботаҡтарында ултырып, мистер Смиттың донъяһын сихри моңға күмеп һайраған. Шулай ул үҙе биргәнгә ҡарағанда күберәкте ҡабул иткән.

Ҡоштарҙы ашатҡандан һуң мистер Смит өйөнән ике квартал алыҫлыҡта урынлашҡан аҡыл үҫеше яғынан артта ҡалған граждандарға ярҙам итеү ассоциацияһына йүнәлгән. Был матур боронғо йортта мистер Смит балалар менән шөғөлләнгән. Улар ғәҙәти мәктәпкә йөрөй алмаған, әммә был ассоциацияла һәр балаға уның һәләтлектәрен асырға ярҙам иткәндәр. Мистер Смит белеме буйынса уҡытыусы булмаһа ла, бында бик күп файҙалы эш башҡарған. Сикһеҙ сабырлыҡ менән ул бәләкәстәргә аяҡ кейемендәге бауҙы бәйләшергә йәки ҡалаҡ менән ашарға ярҙамлашҡан. Мистер Смиттың күпкә һәләтле булыуын белгән дуҫтары уға күпкә яҡшыраҡ эш хаҡы түләнгән эш табырға кәңәш иткән. Әммә мистер Смит ошо балалар менән шөғөлләнеүҙе ҙур бүләк тип иҫәпләгән. Ул бүләк балаларҙың ата-әсәләренең йөрәктән сыҡҡан "Рәхмәт" һүҙҙәрен һәм ассоциация хеҙмәткәрҙәренең "Аллаһ һеҙҙән риза булһын!" тигән һүҙҙәрен ишетеүҙән ғибәрәт булған. Шулай итеп, Мистер Смит балалар өсөн күпте биргән, ә уның урынына үҙе тағы ла күберәкте алған.

Мистер Смит балалар менән шөғөлләнгән ваҡытта уның ҡатыны Сауҙа палатаһының ҡаланың эшлекле кешеләренә һәм профессиональ хеҙмәткәрҙәренә ярҙам күрһәтеүсе офисында эшләгән. Директор һәм менеджер-сәркәтип ставкаларынан ғына торған офис әллә ни килем алмаған. Миссис Смит уларға хаттар ебәрергә, ҡағыҙ күсермәләре эшләргә ярҙам иткән, телефон шылтыратыуҙары менән шөғөлләнгән, кәштәләргә кәрәкле ҡағыҙҙарҙы урынлаштырған, гөлдәргә һыу һипкән. Ул был офисты ныҡ яратҡан һәм уға үҙенең күпселек ваҡытын бүлгән, шул уҡ ваҡытта ул ошо башҡарған эшенән йөрәген шатлыҡ тойғолары менән тултырып, күпкә эйә булған.

Смиттарҙың балалары һәм ейәндәре лә ата-әсәләренең юлын ҡабатлап, изге эштәр башҡарған. Улар шулай итеп кешеләргә эскерһеҙ рәүештә ярҙам иткән дә иткән. Ярҙам урынына - ярҙам, изгелек урынына - изгелек, шатлыҡ урынына шатлыҡ ҡабул иткәндәр. Беҙ күпме бирһәк, ул шунан да артығыраҡ булып беҙгә әйләнеп ҡайта, тигәнде ныҡлы үҙләштергән кешеләр булған шул улар.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ОЛОҒУЖАН ОЛО ЮЛ БАШЛАЙ

**Заман башҡа - заң башҡа, тип бик тапҡыр әйткән халҡыбыҙ. Һәр замандың үҙ бурыстары, тын алышы. Яҡын тарихта бөтә ауылыбыҙ - ҡәүемебеҙ менән колхоз-совхоздарға тупланып, бригадир, мөдир эшкә йәүкәләгәнгә берҙәм ҡубып эшкә сығып, етәккә генә өйрәнгән халҡыбыҙҙы ваҡыт ғали йәнәптәре үҙе ҙур һынау алдына ҡуйҙы: теге яҡҡа китергәме, был яҡҡамы?**



Берәүҙәр йәшәү өсөн юлды шешә эсендә тапты, ҡулын кесәһенә тығып, кем килеп һыҙғырыр, тип, булмаҫтайҙы өмөт итеүселәр ҙә булды. Икенселәр ең һыҙғанып ата-бабалар кәсебенә тотондо, өсөнсөләр алыпһатарлыҡҡа башкөлләп сумды. Егәрлеләр, ҡулы эш белгәндәр һәр замандა ла бирешмәҫ. Тормош һулышын эске һиҙемләү менән тойоп, районыбыҙҙың киләсәген тәшкил итәсәк һөнәргә - туризмды ойоштороуға тотоноусылар отолманы. Сөнки тормош шуны тәкрарлай: ус аяһындай еребеҙҙә игенселек менән әллә ни ыратып булмай. Бабичса әйткәндә, Хоҙай үҙе ҡыҙығыр еребеҙ - Бөрйәнебеҙ Аллаһы Тәғәлә тарафынан нәҡ туризмды үҫтереү, шул юл менән ошонда йәшәүсе аҫаба халыҡты эшле итеү, ысын мәғәнәһендә эпостар , легенда-риүәйәттәр ерлеге, тәбиғи, тарихи һәйкәлдәр төбәге булған ожмахтың ерҙәге кәүсермәһенең бер өлөшө булған районыбыҙҙың бар матурлығын киләсәк быуындарға һәр йәһәттән камил бөтөнлөгөндә илтеү - иң мөҡәддәс бурысыбыҙ.

Ошо бурысты тормошҡа ашырыуға тәүге аҙым яһалды: май аҙағында Бөрйән районының Мораҙым ауылы эргәһендәге Олоғужан аҡланында районда ғына түгел, республикала беренсе тапҡыр туризм сезонын асыу тантанаһы булып үтте. Олоғужан оло йәйләүҙе хәтерләтеп торҙо ул көндө. Бына кәртәләп алынған ялан ситенән тирмәләр теҙелгән. Оло ҡаҙандарҙа боҫорап ит бешә, милли кейемдәге унған хужабикәләр аш ярыштыра, "Азамат" бейеү ансамбле егет һәм ҡыҙҙары бейеүҙәренең һуңғы хәрәкәттәрен теүәлләй, Байназар ауыл Советы биләмәһендә йәшәүсе оҫталарҙың ҡул эштәре күргәҙмәһе күҙҙе арбай, күңелде ылыҡтыра. Байназарҙан Иманғолов Рафаэль ағайҙың ағас сылбырҙары, самауыры, сынаяҡтары, батмандары, ҡумталары, семәрле ижауҙары кешеләрҙең иғтибар үҙәгендә. Мораҙымдан Нәсимә Хәйруллина 50 төр ҡул эше тәҡдим итә. Аш-һыу оҫталары Фирүзә һәм Алма Тулыбаевалар, Ләйсән Әминева йөҙгә яҡын ризыҡ төрө бешереп килтергән. Мәһәҙйәҙән Ф. Ишбаева, Т. Әҙелгәрәева, йөш килендәр Флүзә һәм Фирүзә Ғүмәроваларҙың ҡул эштәре бөгөндән музейға ҡуйырлыҡ. Ошонда уҡ Г. Монасипова Бөрйән сувенирҙары тәҡдим итә. "Бурзяночка" йәмғиәте ҡортсолоҡ продукцияһы килтергән, Ҡурғашлылағы социаль приют һәм балалар баҡсаһы коллективы ла дөйөм эштән ситтә ҡалмаған. Бөтөн ошо күренештәрҙе күҙәтеүе генә лә оло бер ваҡиға буласаҡ бит ситтән килгән туристар өсөн. Шулай булғас, уны нинә кәсепкә әйләндермәҫкә һуң әле?

Шулай уйлап, БР Хөкүмәте Премьер-министры Р. Сарбаевтың туранан-тура ярҙамы менән Олоғужанда беренсе турист тукталҡаһы асылды. Билдәле булыуынса, Ағиҙел буйлап аҡҡан туристар өсөн тағы ошондай 16 тукталҡа урыны төҙөләсәк. Урындағы халыҡ субсидиялар алып, ошондай урындар төҙөһөн, киләсәктә туристар үҙҙәре теләгән тукталҡала туктап, тәбиғәттә ял итһен өсөн бөтөн мөмкинлектәр асыласаҡ. Ә был Олоғужандағы тәүге тукталҡа киләсәктә эшләнәсәк тукталҡаларға өлгө рәүешендә күрһәтелде.

Уның хужалары менән таныштырылды. Олоғужандың оло хужаһы Әбделмәмбәт ауылы уҙаманы Яхин Рәхимйән Зәки улы булыр. Ошондай оло эшкә тотоноорға йөрьәт иткән булдыҡлының маҡсаттары ла ҙурҙан. "2009 йылда эш башлағайныҡ, - тине ул. - Быйыл яҙ был эште ойоштороуға ныҡлап тотондоҡ. Әле беҙҙә егермеләп кеше эшләй. Туристарға йөҡлау урындары, милли аштар менән йәйге кухня, экскурсиялар тәҡдим итәбеҙ. Өс тирмәбеҙ бар. Бынан 5 саҡырым алыҫлыҡтағы Ташөй мәмерйәһенә алып барыу ҙа ҡаралған. Усаҡ урындары булдырылған. Ауылса ҡара мунса төҙөргә ниәт итәбеҙ. Маҡсатыбыҙ - мөмкин булған тиклем туристарға күрһәтә торған хеҙмәттәрҙе киңәйтеү".

Рәхимйән Зәки улы, моғайын да, башҡаларҙы ла үҙ өлгөһөнә эйәртер, тип ышаны килә. Район хакимиәте башлығы Ирек Зарипов дөрөҫ әйтә, беҙҙең халыҡ мал аҫрай, сифатлы ризыҡ етештерә белә, ә бына етештергәнде һата белмәй. Бөрйәндә 3500 баш йылҡы һәм 16 меңдән ашыу һыйыр малы иҫәпләнә. Экологик яҡтан таҙа ит, һөт етәһе. Тик халыҡҡа һатырға өйрәнергә генә кәрәк. Турист килеп һораһа, бындағы кешеләр икмәген бушлай биреп ебәрһә ебәрә, ә һатыу тураһында уйламай ҙа. Ә бит заман башҡа хәҙер. Хәләл көсөндә үҫтереп тапҡан малды аҡсаға әйләндерергә өйрәнергә ваҡыт.

Тукталҡаны асыу тантанаһынан һуң, унда ҡатнашыусылар рухыбыҙ Мәккәһе - Шүлгән тарафтарына юл алды. Юлайҡан Бабсаҡбей ҡорғанына, Йылҡысыҡҡан күленә лә һуғылдылар. Бындағы Морат туғайын танырлыҡ түгел - әйтерһең, унда яңы ҡала төҙөлөп ята. Яр буйлап "Тамъян" этнокультура ойошмаһы тирмә ҡорған. Ҡолғаналар унда тирүгә һуғыу, талҡан тартыу, ойоҡ бәйләү нескәлектәрен килгән ҡунаҡтарға күрһәтә. Кейекбай ауыл биләмәһе унғандары Илүзә Аҫылбаева, Зөһрә Хәлиуллина, Зифа Юлсуриналарҙың ҡул эштәре күргәҙмәһе иҫ китерлек. Ҡорот, эремсек, ҡаймаҡ һатыусылар ҙа бихисап. Быларҙың барыһын да ең һыҙғанып яңы эшкә тотонорға торосус "Ағиҙел" МУП-ы (етәксеһе М. Вәлитова) ойоштороп булып сыҡты. "Ағиҙел" районда булған турфирмалар, турист тукталҡалары эшен координациялаясаҡ, яңы төҙөләсәк тукталҡаларҙы йыһазландырырға ярҙам итәсәк. Быйылғы йәйҙә был предприятие тарафынан туристарға күп төрлө хеҙмәт күрһәтеләсәк. Ялға килгән автотуристарға Морат туғайы участкаһында, ҡурсаулыҡ эргәһендә, йылға ярында ял урындары, милли кухня, туркемпингтар, йыһазландырылған турист тукталҡалары, кафе, мунса, экскурсиялар, тәжрибәле гид, урындағы туроператор, төрлө маршруттар тәҡдим ителәсәк. Ҡыҫҡаһы, боҙ ҡуҙғалды. Быға саҡлы Бөрйәндән ҡырағай туристар ағымы өҙөлмәй ине, хәҙер инде туристар тәбиғәтебеҙҙе бысратмайынса, төрлө хеҙмәт төрҙәренән файҙаланып, мәҙәни ял итеү өсөн юлланасаҡ беҙҙең тарафҡа.

Әйткәндәй, тәүге турист тукталҡаһы асылған көндә экологик ҡыуғынға ла старт бирелде - һыу һәм тәбиғәт менән дуҫ егет-ҡыҙҙарыбыҙ кәмәләрҙә йөҙөп төшөп, Ағиҙелебеҙҙе сүп-сарҙан таҙартты.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА,**
**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**Бөрйән районы.**

*һҮҘ АРАҺЫНДА...*

## Дөгө менән таҙарыныу

**Дөгө ҡулланып, организмды таҙартып була, тип ишеткәнем бар. Уны нисек эшләргә?**

- Организмды таҙартыуҙың тибет ысулы бар. Үҙегеҙгә нисә йәш, шунса аш ҡалағы дөгө (йомро бөртөклөһөн) алығыҙ, уны йыуып, һыуынған ҡайнатылған һыу һалып, һауыт ҡапҡасын ябығыҙ ҙа һыуытҡысҡа ҡуйығыҙ. Тибет табиптары раҫлауынса, ошо ысул менән крахмалы йыуҙырылған дөгө организмдағы бөтә ағыулы матдәләрҙе үҙенә һура. Иртәнсәк һыуын һарҡытып, 1 ҡалаҡ дөгө алып, тоҙ һалмайынса бешергәс, ас ҡарынлай ашағыҙ. Ҡалған дөгөнө, өҫтөнә яңы һыу һалып, кире һыуытҡысҡа ҡуйығыҙ. Һауыттағы дөгө бөткәнсе көн дә шулай ҡабатлағыҙ.

*ЙӘШЕЛ ДАУА*



# ЮЛ ЯПРАҒЫ

**Кешенең мәңгелек юлдашы булған, бөтә континенттарҙа ла үҫкән, бөтә ил халыҡтарының да шифалы хазинаһына әйләнгән юл япрағы хатта бала-сағаға ла билдәле, сөнки улар уйнаған саҡта тәненең сыйылған урынын юл япрағы менән йәбештереп ҡуйырға икәнен белә. Юл япрағының яраларҙы, үпкә ауырыуҙарын, ашҡаҙандың сей яраһын, бөйөр һәм бауырҙы дауалағанын барыбыҙ ҙа белә. Һеҙгә бөгөн ҡайһы бер ауырыуҙарҙан файҙалы кәнәштәр тәҡдим итәбеҙ.**

**Һары һыу ауырыуы.** Иң башта бер ниндәй ҙә һыу ҡушмай ғына ниндәй булһа ла икмәктән (аҡ, ҡара) сохарый ашарға кәрәк, һуңынан бер ҡабул иткәндә 5-тән алып 10 тапҡыр япраҡ ашарға кәрәк. Бер сәғәт буйы эсеүҙә тотҡарларға. Процедураны тағы ла 2-3 тапҡыр ҡабатларға кәрәк.

**Ҡурылдай (бронхит)**, тәмәкесе ҡурылдай астмаһы, йүтәл. 6-7 япраҡ алырға һәм бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуытырға. Һарҡытмаҫҡа. Көнөнә 6-7 тапҡыр 1 балғалаҡ эсергә. Йоҡлар алдынан һәм иртән ас ҡарынға стакандағы төнәтмәнең дүрттән бер өлөшөн эсергә.

**Импотенция.** Әгәр таш ектәрендә үҫкән юл япрағының ҡоро һабаҡтарын күрһәгеҙ, уларҙы йыйығыҙ. Көҙҙән башлап апрелгә тиклем емеш орлоҡтары менән бергә 1 ҡалаҡ һабаҡты ярты стакан ҡайнар һыуҙа бешекләгеҙ. 10-15 минут төнәтергә. Ярты стаканлап көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә. Ирҙәргә 35 йәштән һуң был төнәтмәне дауаланыу өсөн генә түгел, простата бизе, потенция боҙолоуҙан профилактика сифатында эсергә кәрәк.

**Климакс.** Күрем айы ваҡытында һәм ҡан аҡҡанда ауыртыныуҙар булһа, кәйеф төшһә, депрессия булһа, юл япрағының орлоҡ емештәре һарҡындыһын эсһәгеҙ, барыны ла үтер. Бының өсөн 1 ҡалаҡ емеш орлоғон 1 стакан ҡайнар һыуға һалырға, һыу буйында 5 минут тирәһе тоторға. Һыуынғас, көнөнә 4 тапҡыр 2 ҡалаҡ эсергә. Һарҡындыны 2-3 көн һыуытҡыста һаҡларға мөмкин. Һарҡындыны саҡ ҡына ҡайнар һыу ҡойоп йылытып эсергә. Бындай һарҡынды ирҙәр климаксынан да ярҙам итә.

**Түлһеҙлек.** Әгәр көпшәләрҙә шешеү процесы булһа, юл япрағы һарҡындыһы ҡатынҡыҙ түлһеҙлегенән ярҙам итә. Һарҡындыны климакс ваҡытындағы кеүек үк әҙерләйҙәр: 1 ҡалаҡ емеш орлоғон 1 стакан ҡайнар һыуға һалабыҙ. Ошондай дауаланыу һөҙөмтәһендә күп кенә йәш ҡатындар әсә булыу бәхетен татыны.

**Юл япрағын ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡулланырға ярамай.** Әгәр ауырыуҙа ҡан ойошоуы йыш күҙәтелһә, унан баш тартырға кәрәк. Юл япрағының һуты ҡанды ҡуйырта икәнлеге билдәләнгән. Тағы ла уны юғары кислоталы гастрит булғанда ҡулланырға кәрәкмәй.

*ИҒЛАН*

**Утеряны пенсионное удостоверение и водительское удостоверение на имя Халиулина Фагима Аглямовича, нашедшего просим вернуть за вознаграждение. Тел.: 272-59-19, 8-927-947-44-21.**

БАЛАҢА УҠЫ!

# СӘПӘКӘЙЛӘП ШАТЛАНА

## минең кескәй ул ғынам

**Әсәйҙәрҙең бишек йырҙарында бәүелгәнбеҙ һәр беребеҙ. Ул йырҙарҙан, моғайын да, моңобоҙға, телебеҙгә һөйөү тоҡанғандыр күңелдәребеҙҙә. Өләсәй-олатайҙар һөйләгән әкиәттәр ҙә онотолмай, ғүмер буйы оҙата бара беҙҙе. Йәш атай-әсәйҙәр ҙә балаларын ошо бишек йырҙары, һикерткәндә, йыуындырғанда, сабыйының һәр аҙымы һайын әйтелгән һамаҡлауҙар рухында үҫтерһә ине, тип, Архангель районы Тирәкле ауылында йәшәүсе Роза ҒӘББӘСОВАның ижад ынйыларын тәҡдим итмәксе булдыҡ.**



### Сәпәкәй иткәндә

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Мин әлегә бәләкәй.
Үҫеп китермен әле,
Йүгереп китермен әле.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Сәпәкәйләй ҡул ғына.
Сәпәкәйләп шатлана
Минең кескәй ул ғынам.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Ҡулым әле бәләкәй.
Бер аҙ үҫкәс, ашармын
Үҙем тотоп әпәкәй.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Сәпәкәлә ҡулдарың.
Хәрәкәттә бәрәкәт -
Ҙур үҫерһең, уңғаным.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Ҡулдарың һис талмаһын.
Ата-әсәң ғорурланып
Һине һөйөп туймаһын.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Минең улым бәләкәй.
Үҫеп тә етер әле,
Баһадир булыр әле.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Минең ҡыҙым бәләкәй.
Үҫеп тә етер әле -
Булыр өйөмдөң йәме.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Әлегә ул бәләкәй.
Булыр әле баһадир-
Ҡатынына яҡшы ир.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Сәпәкәйләй белә ул,
Әсәңә һин иркә бул,
Ә атаңа - яҡшы ул.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Тышта йөрөй бер тәкә.
Бында килеп етмәһен -
Беҙҙе һөҙөп китмәһен.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Тышта Алабай әрә.
Алабайым эт икән -
Кемде һағалай икән.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Көтөүҙән һыйыр килә,
Мөңөр-мөңөр итә лә
Миңә һөтөкәй бирә.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Тышта йөрөй әтәскәй.
Ниндәй матур әтәсе -
Кейгән ҡыҙыл кәпәсен.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Ҡаҙым һалған йомортҡа.
Бәпкәләре сыҡыр әле -
Ҡыҙым уны ҡарар әле.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Шкафта ята тәтәй.
Уны алырға уйы,
Әлегә етмәй буйы.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Ҡалаҡты ҡуйҙы алға.
Эй, тырыша, эй, самалай
Үҙе тотоп ашарға.

Сәпәкәй-сәпәкәй,
Беҙҙә матур тамаша.

Ҡыҙым хәҙер үҙем генә
Эшләйем тип маташа.

Сәпәкә-сәпәкә,
Беҙҙә шатлыҡ, мәрәкә.
Һөйөнә ата-әсә -
Балам бәхеттәр сәсә.

Сәпәкә-сәпәкә,
Беҙҙә шундай мәрәкә -
Матур итеп һамаҡлау
Инеп ята йөрәккә.

Сәпәкә-сәпәкә,
Сәпәкәлә һамаҡлау,
Һамаҡлауҙа тәрбиә,
Тәрбиәлә бар маҡтау.

### Һикерткәндә

Һоп-һоп, һикерә
Минең кескәй ул ғынам,
Атаң-әсәңә һәр саҡ
Һин ярҙамсы бул ғына.

Һоп-һоп, һикерә
Минең кескәй ҡыҙ ғынам,
Ҡашы ҡара, буйы зифа -
Ул бит минең наҙ ғынам.

Һоп-һоп, һикерә,
Оса бейеккә-күккә,
Осҡан һайын бейеккә
Үҫеп тора ул күпкә.

Һоп-һоп, һикергәндә
Аяғы талмаймы икән.
Тыпыр-тыпыр бейеп ала -
Бейеүсе булырмы икән.

Һикер-һикер бейектәргә -
Космонавт һин булырһың.
Сынығырһың, нығынырһың-
Һау-сәләмәт булырһың.

Әрүк-әрүк-әп-әрүк,
Минең улым ҙур үҫә.
Атаһына, әсәһенә
Ярҙамсы булып үҫә.

Әрүк-әрүк, һикер, улым,
Һин Хоҙайҙың биргәне.
Үҫеп еткәс онотмаҫһың
Атаң, әсәң һөйгәнен.

Әрүк-әрүк, һикерәйек -
Ҙур үҫеп һин китерһең.
Һау-сәләмәт үҫеп еткәс,
Мораҙыңа етерһең.

Әрүк-әрүк, һикер, балам,
Һау-сәләмәт булырһың.
Үҫеп еткәс халҡыңдың һин
Таянысы булырһың.

Һикерәйек-һикерәйек -
Һикергәндә бейеккә.
Самолетка ултырып
Менеп етәйек күккә.

Ҡояш кеүек йөҙөң балҡый
Һикергәндә бейеккә.
Һинең кеүек аҡыллылар
Донъяла бит һирәктер.

Әрүк-әрүк, әп әрүк,
Бик матур һикерәһең.
Ҡоштар кеүек талпынаһың-
Өйгә нур килтерәһең.

Һикер шулай, һикер шулай-
Аяҡтарың талпына.
Фәрештәләр ярҙамында
Күңелең ҡанатлана.

**(Дауамы бар).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАШҠОРТ ҺАРҠЫНДЫҺЫ МЕНӘН...

## тулған Себер

Шағирҙарға даһилыҡты бирә икән, биргән, даһилыҡҡа һиллылыҡты ҡушып бирмәгән.

**(Рәшит Шәкүр).**

Башҡорт һарҡындыһы менән тулған Себер, халыҡ, тиеп әсенмәйҙәр береһе бер.

**(Рәйес Түләк).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер батша күрше батшалыҡтағы хакимдың аҡылын һәм күҙәтеүсәнлеген, уның халҡының тапҡырлығын һынап ҡарамаҡсы булған һәм уларға өс бер төрлө, бер ауырлыҡтағы алтындан яһалған кеше һындары ебәргән. Хаким алдына шундай бурыс ҡуйылған: ошо һындарҙың ҡайһыһы иң ҡиммәтлеһе. Бурыс йөкмәтелгән хаким үҙенең вәзирҙәре менән бергәләп был һынды иғтибарлап ҡарап сыҡҡан, ләкин улар араһында бер ниндәй айырма ла күрмәгән. Батшалыҡтағы иң аҡыллы ҡарттар ҙа был һындар араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ, тип раҫлаған. Хакимға быларҙы ишетеүе бик ҡыйын булған. Ул үҙенең еңелеүен таныр хәлгә килгәндә, төрмәлә ултырған бер егет ул серҙе сисеп ҡарарға теләк белдергән. Егетте хаким һарайына килтергәндәр һәм уға баяғы алтын һындарҙы ҡарарға биргәндәр. Егет һындарҙы иғтибар менән ҡараған һәм уларҙың һәр береһенең ҡолағында берәр бәләкәй тишек барлығын асыҡлаған. Шунан егет ул тишектәргә нәҙек кенә көмөш сым тығып, тикшереп ҡараған. Бер тишек ауыҙ менән, икенсеһе - икенсе ҡолаҡ, өсөнсөһө кендек менән тоташҡан булып сыҡҡан. Бер аҙ уйлап торғас, егет хакимға шулай тигән: "Ғәли йәнәптәре, был мәсьәләнең сиселеше асыҡ китап һымаҡ алдыбыҙҙа ята. Уны уҡып ҡарарға ғына кәрәк. Кешеләр бер-береһенән айырылған кеүек, һындар ҙа бер-береһенән айырыла. Беренсе һын ишеткәнен бар донъяға яңғыратып һөйләргә ашыҡҡан кешегә оҡшаш. Икенсе һын "бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға" тип йөрөтөлгән кешеләргә оҡшаған. Өсөнсө һында һәр ишеткәнде йөрәгенә яҡын алған кешеләр менән оҡшашлыҡ бар. Хәҙер, ғәли йәнәптәре, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ - ҡайһы һын ҡиммәтерәк һәм кемде һеҙ үҙегеҙҙең яҡын кешегеҙ итеп һайлар инегеҙ: бер ниндәй һүҙҙе лә тотмаусынымы, һеҙ әйткәндәрҙе ел кеүек осороп торғандымы, әллә үҙегеҙ тулыһынса ышана алған кешенеме?.."**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН

### Йомортҡалы һәм һөтлө картуф

Ярты кило картуфты йоҡа ғына турап, тоҙлап майлы кәстрүлгә һалырға. Туҡылған бер йомортҡаны бер сынаяҡ һөт менән болғатҡас, картуф өҫтөнә ҡойорға. Өҫтөнә ике ҡалаҡтай аҡ майҙы киҫәктәргә бүлеп һалырға ла, ҡырғыстан үткәрелгән 100 грамдай ҡаты сыр менән ҡапларға. Мейестә 30-40 минут бешереп алырға.

### Картуфтан ҡоймаҡтар

Бер тәрилкә әрселмәй бешерелгән картуфты эре ҡырғыстан үткәреп, күпертелгән 30 грамм аҡ май йә ике ҡалаҡ үҫемлек майы, 1-2 йомортҡа, 2 ҡалаҡ он, тоҙ ҡушып болғатып, түңәрәк көлсәләр эшләйһең. Уны тәүҙә онда, аҙаҡ йомортҡала һәм сохариҙа әүәләп алғас, майлы табаға һалып ҡыҙҙырып алырға. Был ҡоймаҡтарҙы итле аҙыҡҡа йәки балыҡҡа гарнир итеп бирергә була.

### Картуф менән эремсектән торт

40 грамм аҡ май, 150 грамм шәкәр ҡомо, 2 йомортҡа һарыһын туҡып күпертергә лә, 400 грамм эремсекте, ванилин, үткәрелгән 1 лимон тышы, ҡырғыстан ҡырылған ярты кило картуфты, аш содаһы һәм йомортҡа ағын күпертеп ҡушҡас, майланған табаға һалып мейестә бешереп алырға. Торт бер аҙ һыуынғас, урталай арҡыры ҡырҡып, ҡайнатма йә джем һылап ҡатларға кәрәк.

### Картуфтан салат

Ярты кило бешкән картуфты әрсеп, киҫәктәргә турарға. 1 тоҙло ҡыярҙы ярым түңәрәктәр итеп һәм 1 йомортҡаны ваҡ ҡына итеп турарға. Өс ҡалаҡ ҡаймаҡ, бер балғалаҡ майонез һәм ярты ҡалаҡ гәрсис һалып бөтәһен бергә болғатырға.

**Мәхрүсә МӨХӘМӘТЙӘНОВА.**

ИҒЛАН

**Хәйбулла районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты Ғатаулла ишан, Зәйнулла ишан, Ғабдулла Сәиди ишан, Мөжәүир хәҙрәт һәм башҡа танылған дин әһелдәре, республикаң күренекле шәхестәре һәм батырҙары иҫтәлегенә арналған республика йыйынына саҡыра. Районда үткәреләсәк был оло сара 3 июлдә Вәлит ауылында, Ғатаулла ишан ерләнгән урында үтәсәк. Башлана сәғәт 10-да.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6167
Заказ 2498